✓ ***"Әгәр кешеләр иҫкегә генә, традицияға ғына йәбешеп ятһа, әле лә мәмерйәлә ултырған булырҙар ине, шул уҡ ваҡытта традициянан бөтөнләй баш тартһалар - кире мәмерйәгә әйләнеп ҡайтырҙар ине".***

***(Поляк ғалимы).***


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

24 - 30 СЕНТЯБРЬ (ҺАРЫСАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№39 (457)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Ожмахмы?**

Ул әсәләрҙең аяҡ аҫтында



5

**Дәрестең бәҫен...**

теория уҡытыу түбән төшөрә



6-7

**Спорт һәм сәйәсәт менән шөғөлләнеү...**

киләсәгендә яҡтылыҡ күрергә ярҙам итә



8-9

**Журналистарҙы ла...**

себеште лә көҙ һынайҙар



12-13

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Башҡортостан юлдаш телевидениеһы ошо көндәрҙә үҙенең ун йыллығын билдәләй. Байрам уңайынан әйтелгән һүҙ һәм теләктәр ниндәй булыр?

***Рәсимә УРАҠСИНА, филология фәндәре кандидаты, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, балалар яҙыусыһы:*** Башҡортостан юлдаш телевидениеһының барлыҡҡа килеүе тарихи ваҡиға булды. Ул беҙҙең тарихыбыҙҙы, рухиәтебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе, бер һүҙ менән әйткәндә, булмышыбыҙ, асылыбыҙҙы байҡау һәм дә барлау өсөн бик мөһим, шул уҡ ваҡытта күптән кәрәкле сара ине. Бигерәк тә балалар өсөн өр-яңы донъя асылды. Туған йырмондарыбыҙ, бейеүҙәребеҙ, тарихыбыҙ, фольклорыбыҙҙың аҫыл өлгөләре улар аңында уҡытыусының дәрестә һөйләгәндәренән генә тулы кәүҙәләнеш ала алмаған булһа, хәҙер был бушлыҡты телевидениебыҙ тапшырыуҙары аныҡ йөкмәтке һәм сюжеттар менән тулылындыра, байыта. Тимәк, Башҡортостан юлдаш телевидениеһы тамаша ҡылыу экраны ғына түгел, ә тәрбиәсе, уҡытыусыларҙың ярҙамсыһы ролен дә башҡара. Мәҫәлән, башҡорт телен өйрәнеү дәрестәрен генә алайыҡ. Бында ҡайһы бер уҡытыусыларға методик ярҙам булырҙай нәмәләр күп.

Һәр иртә һайын "Сәләм" тапшырыуын яратып ҡарайым. Элек унын бер өлөшө матур, татыу ғаиләләр, алтын туйҙарын билдәләүсе ғаилә башлыҡтары хаҡында сюжеттарға, ыңғай материалдарға ҡорола ине. Шулай дауам итһә ине, тигән теләктәмен, сөнки Үҙәк телевидениенан беҙгә фәҡәт енәйәт, көс ҡулланыу, уғрылыҡ, үлтереш һәм башҡа шундай ҡот осҡос программалар ғына тәҡдим ителә. Бының бит күрәләтә кешелекте тарҡатыусы, емергес һөҙөмтәләргә килтереүе бар! Шуға күрә лә беҙҙең телевидение тапшырыуҙарында ыңғай күренештәргә, дуҫлыҡ, татыулыҡ, тигеҙлек идеяһына нигеҙләнгән материалдарға күберәк урын бирелһен ине.

Мин үҙебеҙҙең телевидениела йыш булам, тапшырыуҙарҙа ҡатнашам. Унда эшләүсе ҡыҙҙар һәм егеттәр миңә бик оҡшай. Улар бынан 20 йыл элек эшләгән хеҙмәткәрҙәрҙән бөтөнләй айырылып тора: заманына ҡарата әүҙемдәр, оперативтар, кешегә иғтибарлылар. Йәш булыуҙарына ҡарамаҫтан, өлгөргән, матур тапшырыуҙар, үҙенсәлекле проекттар уйлап сығаралар. Хатта тырышып-тырмашып сит телдәрҙе өйрәнәләр. Улар Башҡортостанда ғына түгел, ҡайҙа ла юғары кимәлдә эшләй алырлыҡтар, тип уйлайым. Үҙәк телевидениеның яҡшы тапшырыуҙары кимәленә ынтылыу менән бергә, программаларында милли үҙенсәлектәребеҙҙе лә һаҡлап ҡала беләләр.

Теләк рәүешендә мин телевидение журналистарына шуны әйтер инем: башҡорт теле культураһына өйрәнергә кәрәк. Уларҙың ораторлыҡ кимәле, телмәр оҫталығы һәр тыңлаусыға өлгө булып торорға тейеш.

Балалар яҙыусыһы, уҡытыусы булараҡ, минең үҙемә "Тамыр" студияһы тапшырыуҙары оҡшай, сөнки, әйтеүемсә, ниндәйҙер кимәлдә улар тәрбиәсе, уҡытыусы ролен дә үтәйҙәр. Мәҫәлән, "Сәңгелдәк" тапшырыуы - ысын мәғәнәһендә милләтебеҙ сәңгелдәге бит ул! Теле асылғандан алып кескәйҙәрҙе матур итеп һөйләшергә, йырларға, бейергә, уйнарға һәм әлбиттә, уйларға өйрәтеүҙәре генә ни тора! Күпме таланттар асты һәм был изге эшен уңышлы дауам итә "Тамыр"!

***Зөлфиә СИБӘҒӘТОВА, уҡытыусы:*** Ә мин Салауат Хәмиҙуллиндың тарих темаһына арналған тапшырыуҙарын көтөп алам. Ошо журналистың профессионаллегенә, белеменә, тел оҫталығына аптырайым һәм һоҡланам. Тарихыбыҙҙың бығаса өйрәнелмәгән күпме биттәрен асты, күпме хәл-ваҡиғаларҙы, шәхестәрҙе танытты ул! Былдай тапшырыуҙар башҡа каналдарҙа юҡ та шикелле инде. Сәбәбе билдәле: һәр халыҡ та ауыҙ тултырып һөйләрлек тарих тыуҙыра алмай, күккә сөйөр шәхестәре менән дә маҡтана алмай. Башҡортомдоң ул тарихы төрлө милләт тарихсыларының хеҙмәттәрендә күптән урын алған, тик уны өйрәнеүселәр ниңәлер был хеҙмәттәрҙе юл аша уҡыған. Салауат Хәмиҙуллин иһә улар төшөрөп ҡалдырған юлдарҙы яңынан уҡый, яңынан аңлатма бирә. Ҡасандыр бер интервьюһында билдәле тарихсы Морад Аджи: "Халыҡ тарихын ошо халыҡ вәкилдәре яҙырға тейеш", - тигәйне. Ҡалай дөрөҫ әйтә ул! Беҙҙең тарихты башҡалар яҙған өсөн дә беҙ уны асылда белмәй йәшәгәнбеҙ бит. Башҡортостан юлдаш телевидениеһында Салауат Хәмиҙуллиндың тапшырыуҙары күп нәмәгә күҙҙәрҙе асты. Үҙенең ниндәй милләттән икәнен белмәй, аҙашып йөрөгән милләттәштәр өсөн тәғәйенләнгән "Ауылым тарихы" тапшырыуын да эфирға ҡайтарырҙар, тигән өмөттәмен.

**(Дауамы 2-се иттә).**



Һәр иртәбеҙ "Сәләм"дән башлана...

✓ "Башҡорт йыры" тапшырыуын яратып ҡарайым. Өфө дәүләт сәнғәт академияһы профессоры Римма Мусина-Юлдашбаеваның йәш йырсыларға кәңәштәрен ысын мәғәнәһендә оҫталыҡ мәктәбе тип ҡабул итәм.



ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# ЯРАТҠАН ШӨҒӨЛӨМ...

## өҫтәмә килем килтерә



Гәзиттәге яңы рубриканы уҡығас, үҙемдең шөғөлөм хаҡында ла яҙырға булдым, сөнки ул минә рухи ҡыуаныс, эстетик ләззәт кенә бирмәй, ә ғаилә бюджетында иш янына ҡуш булып та тора. Һөнәрем буйынса мин рәссам, әлеге ваҡытта декрет ялындамын. Бәләкәсем йоҡлаған ваҡыттағы "буш" сәғәттәремде мауыҡтырғыс та, файҙалы ла итеп үткәрергә тырышам һәм ятратҡан шөғөлөм - батик төшөрөү менән булышам. Батик - туҡыманы (ебәк, мамыҡ, йөн, синтетка һ.б.) ҡулдан биҙәүҙең дөйөмләштерелгән атамаһы. Эш алымының нигеҙендә туҡымала буяу үтмәҫлек һәм төрлө биҙәктәр барлыҡҡа килтереүсе аныҡ сиктәр булдырыу өсөн буяуҙар ялғанған ерҙә резерв тип аталған махсус нығытманың ҡулланылыуы ята. Резерв составы, ҡулланылған туҡымаға ҡарап, балауыҙ, парафин, бензин, һыуҙан һәм башҡа составтан торорға мөмкин.

Таныштарым, дуҫтарым, туғандарым үҙҙәренә йәки бүләккә тип батиктан төрлө картина, яулыҡ, шарф, палантин һәм паннолар эшләтә. Батик сәнғәте күп төрлө, ҡатмарлы, шул уҡ ваҡытта үҙенсәлекле булыуы һәм матурлығы менән һәр саҡ үҙенә тарта, шуға күрә был оҫталыҡтың юғары кимәленә етеү теләге ижадсыны бер ҡасан да ташламай, яңынан-яңы үрҙәр яуларға мөмкинлек бирә һәм бер-береһенә оҡшамаған әйберҙәр ижад итергә ярҙам итә. Был, үҙ сиратында, әйберҙе оригиналь һәм ҡабатланмаҫ итеп, бүләк тапшырыусыны ла һөйөндөрә, бүләк ҡабул итеүсегә лә онотолмаҫ тәьҫораттар ҡалдыра, ә минә үҙ шөғөлөмдән өҫтәмә килем алырға булышлыҡ итә. Батик ҡулланып эшләнгән әйберҙәр үҙҙәренең сағыулығы, нәфислеге, матурлығы менән күҙгә ташланып тора һәм, шуға ярашлы, хаҡы ла "арыу" ғына, тик сифатлы әйберҙәр ҡулланырға яратҡандар уның хаҡына ҡарамай. Тимәк, батикты яратыусылар, уның менән ҡыҙыҡһыныусылар булғанда, минә әҙме-күпме аҡса эшләү мөмкинлеге һәр саҡ буласаҡ. Тик күп һәм тиҙ аҡсаға ымһынып, ашығып эшләп, оҫта тигән исемде юғалтыуҙан, сәнғәттең һинән "баш тартыуынан" ҡурҡыу кәрәк. Ижад хатаны һәм әҙәпһеҙлекте ҡабул итмәй, шуға күрә был өлкәлә эш итеүселәргә бик һаҡ булыу мотлаҡ. Шул уҡ ваҡытта Хоҙай тарафынан бирелгән талантты матди яҡты тулылындырыу өсөн дә ҡулланыу хилафлыҡ түгел, ә беҙҙең заманда иһә уны зарурлыҡ тип тә әйтергә мөмкин.

**Ләйсән ҒӘЙНЕТДИНОВА.**
**Өфө ҡалаһы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Башҡортостан юлдаш телевидениеһы ошо көндәрҙә үҙенең ун йыллығын билдәләй. Байрам уңайынан әйтелгән һүҙ һәм теләктәр ниндәй булыр?

***Мәрйәм БУРАҠАЕВА, яҙыусы:*** Һуңғы ваҡытта Башҡортостан юлдаш телевидениеһы тапшырыуҙары бик үҙгәрҙе, заманса яңылыҡ алды. Был йәһәттән мин иң тәүҙә Шамил Кучуков алып барған "Ауылыма ҡайтам" проектын билдәләп үтер инем. Тапшырыуҙарҙың береһендә минең үҙемә лә ҡатнашырға тура килде. Проекттың идеяһы халыҡ өсөн бик файҙалы булмаҡсы: ауылдарынан сыҡҡан берәй билдәле, абруйлы шәхескә ауылдаштары үҙҙәренең тормошо, проблемалары хаҡында һөйләй, элек депутаттарға биргән кеүек наказдар бирә. Депутатҡа нимә инде ул - тау-тау вәғәҙә биреп китә лә, һайланғас, онота. Улар ышанысты аҡламағас, хәҙер ауыл халҡы үҙенең абруйлы яҡташтарынан ярҙам көтә инде. Мәҫәлән, үткән бер тапшырыуҙа билдәле артисыбыҙ Хөрмәтулла Үтәшевтан ауылдаштары газ үткәреүҙә ярҙам итеүен һораны.

"Башҡорт йыры" тапшырыуын яратып ҡарайым. Өфө дәүләт сәнғәт академияһы профессоры Римма Мусина-Юлдашбаеваның йәш йырсыларға кәңәштәрен ысын мәғәнәһендә оҫталыҡ мәктәбе тип ҡабул итәм. Ул бик дөрөҫ әйтә: ҡайһы бер башҡарыусылар йырҙың һүҙҙәрен һәм көйөн генә башҡара, ә моңдо тойомлау һәләте юҡ.

Яңыларҙан "Арыҫлан" ирҙәр клубы ла үҙенсәлекле тапшырыу. Тик мине унда ҡатнашыусыларҙың телмәре бик борсоуға һала. Алып барыусыға һүҙем юҡ, Рәсүл Сәғитов та матур һөйләй, ә бына башҡаларға телмәр культураһын үҫтереү буйынса ныҡ ҡына эшләргә кәрәк. Югиһә, йыш ҡына ун һүҙҙең бер-икеүһе генә башҡортса була. Һәр саҡ иҫтә тотайыҡ: тел - ул моң, беҙ ул моңдо боҙорға тейеш түгелбеҙ.

***Вәкил ХАЖИН, педагогика фәндәре кандидаты:*** Башҡортостан юлдаш телевидениеһы ойоштороло уға ун йыл да булып киткән икән. Бәләкәй генә булһа ла, был да юбилей. Халҡыбыҙҙың ғәүһәр рухи ҡомартҡыларын, тарихын һаҡлау, бөгөнгөһөн яҙҙырып барыу, һис һүҙһеҙ, яуаплы һәм маҡтаулы бурыс. Телевидение коллективы был бурысты үтәү өсөн мөмкин булғанса тырыша. Әлбиттә, тәжрибә, аҡыл һәм өлгөргәнлек йылдар дауамында туплана. Байрам итеүҙән бигерәк, башҡарылған эштәргә үҙенсәлекле йомғаҡ яһау, шунан сығып, тапшырыуҙарҙы тағы ла камиллаштырыу, үткерләндереү буйынса бурыстар билдәләү тип аңлайым мин был датаны. Байрамдар беҙҙә былай ҙа күп: йырлайбыҙ ҙа бейейбеҙ, тигәндәй. Шуның араһында бөгәе бер мөһим нәмәләрҙе лә онотоп ебәрә күрмәйек. Башҡорт телевидениеһына ҡарата тәүге фекерем шул: һуңғы йылдарҙа башҡорт теләндәге тапшырыуҙар нык кәмене. Булғандары ла, әлеге әйткәнемсә, йыр ҙа бейеү, шау-шыу. Социаль-иҗтимағи проблемалар, халыҡ һәм тел мәсьәләләре, рухиәтебеҙ, әхләҡ ҡиммәттәре хаҡында тапшырыуҙар күберәк булһын ине, тигән теләктәмен. Телмәр культураһы аҡһай. Был хаҡта һүҙ башлағас, әйтәйем: "Башҡорт телен өйрәнәбеҙ" тигән өҫтәмә тағылма (заставка) биреү бик яҡшы, тик тормошта ин кәрәкле, киң ҡулланылышта булған һүҙбәйләнеш һәм һөйләмдәрҙе яңғыратырға кәрәк. Мәҫәлән, "Һаумыһығыҙ! Хәлдәрегеҙ нисек?" йә булмаһа "Ҡайҙа бараһың?" тигән рәүештәрәк. Ғөмүмән алғанда, шулай тип әйтәм: үҙ телевидениебыҙға әйә булыу бәхете бирелгән икән, беҙ был мөмкинлекте тулы ҡеүәтенә эшләтергә, уның һәр сәғәтен, минутын сифатлы, фәһемле тапшырыуҙарға бирергә тейешбеҙ.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА**
**яҙып алды.**

КЕМ АЛЫҠ!

# БҮЛӘККӘ - "ДИНИ КАЛЕНДАРЬ"

**Мөхтәрәм милләттәшебеҙ! Бына тағы һине лә, баҫмабыҙҙы ла, ошо баҫманы ижад итеүселәрҙе лә һынау мәле етте. Гәзитебеҙҙе уҡыусы милләттәш туған телдәге баҫманы ниндәй дәрәжәлә һанлай һәм баһалай? Уның үҙ милләтенә, туған теленә ҡарата аң, рух, ихтирамы ниндәй кимәлдә? Баҫмабыҙҙағы һүҙ ҡеүәһе, фекер үткерлеге уның күңелен арбай, сәмен һәм ғәмен уята алырлыҡмы?**

Бына шулай, **2012 йылдың беренсе яртыһына гәзитебеҙгә яҙылыу башланыуын иғлан итеп**, уҡыусыбыҙ һәм үҙебеҙ алдына ошо һорауҙарҙы ҡуйбыҙ. Һәр ваҡыттағыса, уҡыусыны ылыҡтырыр вәғәҙәләребеҙ ҙә бар: күп һорауҙарығыҙға яуап бирер, ниндәйҙер ауырлыҡтарға юлыҡҡанда уларҙы еңер сара, борсолоуҙар мәлендә - йән тыныслығы, күңел төшөнкөлөгө булғанда - рухландырыр, сәмләндерер һүҙ әйтер матур йөкмәткеле баҫма аласаҡһығыҙ ҡулдарығыҙға.

**Бынан тыш**, әлбиттә, оптимистар өсөн **бүләктәр ҙә** булмай ҡалмаясаҡ. Оптимистар өсөн, тибеҙ, сөнки гәзитебеҙгә яҙылыу тураһындағы квитанцияларҙың "Мин барыбер бүләкһеҙ ҡалмайым!" тигән кешеләрҙән генә килеүе яҡшы беләбеҙ. "Киске Өфө"нө уҡыусыларҙың барыһының да оптимист булыуын теләйбеҙ, уларҙың ошондай сифаттарын уятыуҙы маҡсат итеп ҡуйбыҙ. Ә **сентябрь айында гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән 30 кешегә 2012 йыл өсөн "Дини календарь" ебәрәбеҙ.**



**Әйткәндәй**, кемде бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтәнә шатлыҡ өҫтәр.

**"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, ата-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Шулай итеп**, 2012 йылдың тәүге яртыһына гәзитебеҙҙең 50665 индекслыһына **348 һум 24 тингә**, 50673 индекслыһына (юридик шәхестәр өсөн) **378 һум 24 тингә** яҙыла алаһығыҙ.

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog. kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов Башҡортостан юлдаш телевидениеһына 10 йыл тулыу айҡанлы үткәрелгән байрам кисәһендә ҡатнашты һәм коллективты юбилейы менән ҡотлап, телеканал эшенә юғары баһа бирҙе. Сара Конгресс-холл бинаһында үткәрелде, ә Салауат Юлаев исемендәге майҙанда йәштәр өсөн программа ойошторолдо.

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов етәкселегендәге рәсми делегация Татарстанға сәфәргә сыҡты. Визит сиктәрендә Түбәнге Камалағы "ТАНЕКО" асыҡ акционерҙар йәмғиәте, Яр Саллылағы "КАМАЗ" асыҡ акционерҙар йәмғиәте һәм "Мастер" Кама индустриаль паркы эшмәкәрлеге менән танышыу, башҡа хөкүмәт-ара осрашыуҙар, Муса Йәлил исемендәге Татар дәүләт академия опера һәм балет театрында үтәсәк Башҡортостан Республикаһы сәнғәт оҫталарының концертында булыу планлаштырылған.

✓2012 йылға пенсияға социаль өҫтәмәне билдәләү өсөн пенсионерҙарҙың йәшәү минимумы 2012 йылда 5220 һум буласаҡ. БР Хөкүмәтенең был закон сығарыу инициативаһын 21 сентябрҙә үткән республика Парламентының көҙгө сессияһы ултырышында беренсе уҡыуҙа депутаттар ҙа яҡлап сыҡты. 2011 йылда йәшәү минимумы пенсионер өсөн 4571 һум тәшкил иткән. Былтырҙан алып йәшәү минимумынан кәмерәк пенсия алған хаҡлы ялдағыларҙың пенсияһына социаль өҫтәмә билдәләнә. 2011 йылдың сентябренә 94330 пенсионерға 74951 мең һум дөйөм суммаға федераль бюджеттан өҫтәп түләүҙәр билдәләнгән. Өҫтәмәнең уртаса күләме 794,6 һум тәшкил иткән.

✓Башҡортостан Хөкүмәте һәләтле йәштәргә абруйлы сит ил вуздарында белем алыу өсөн гранттар бүлә. 2009 йылда бөтәһе 37 кеше сит илдә белемен камиллаштырыу хоҡуғын яулағайны. 2010 йылда тағы ла 28 кеше Башҡортостан Хөкүмәте грантына лайыҡ булды. Быйыл тағы ла биш кеше Бөйөк Британия, Швейцария, Германия вуздарында профессиональ белемен нығытасаҡ. Сит илдәрҙә уҡыясаҡ йәштәр БР Хөкүмәте һәм Мәғариф министрлығы тарафынан ойошторолған конкурс нигеҙендә һайлап алына. Конкурста ҡатнашыусылар мотлаҡ юғары белемгә эйә булырға һәм сит телде яҡшы белергә тейеш. Улар инглиз теле буйынса халыҡ-ара имтихан тапшыра.

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# ТАМАҠ...

## тамуҡҡа төшөрә

**"Әгәр ҙә атайымдың үлерен бер көн алдан белгән булһам, кисә уны бер телем икмәккә алмаштырыр инем", тигән аслыҡтан миктәп ғазапланған бер бала. Был һүҙҙәрҙә аслыҡтың әҙәм балаһы өсөн ни тиклем ҙур афәт, һәләкәт икәнлеге хаҡында әйтелә. Ысынлап та, аслыҡтан ыҙалаған кеше өсөн бер ҡабым ризыҡтың баһаһы әҙәм балаһына иң ҡәҙерле, гәзиз булған атай хаҡы менән билдәләнгәс, башҡа һәр төрлө ҡиммәттәр, гуманистик идеялар әһәмиәтен юғалта төҫлө. "Ас кеше иман хаҡында түгел, бер телем икмәк хаҡында ҡайғырта", тағы ла "Аслыҡ-хәйерселек бар ерҙә иман булмай", тип тә әйтәләр. Бәлки, шуның өсөн дә "Тамаҡ тамуҡҡа төшөрә" тип әйткәндәрҙер инде.**



Күренекле башҡорт шағиры, мәғрифәтсеһе һәм ғалимы Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев 1897 йылда Ҡаҙанда, 1984 йылда Өфөлә сыҡҡан "Йәдкәр" китабында милләтебеҙ йәшәйеше өсөн ҡағиҙә булырлыҡ түбәндәге һүҙҙәрҙе яҙа: "Аҫаба башҡортҡа өс нәмәне белеү мотлаҡ: беренсеһе - үҙендең сығышыңды, йәғни үҙ ырыуыңды белеү, икенсеһе - йондоҙҙарҙы исемләп аңлатыу һәм өсөнсөһө ... риүәйәттәрҙе һәм өләндәрҙе белеү". Милләтебеҙ өсөн йәшәү программаһы, милли идея булырлыҡ был һүҙҙәрҙең мәғәнәһе, бер яҡтан ҡарағанда, бик ябай, аңлайышлы булып тойолһа ла, ҡапылғарай аңлашылып бөтмәгән урындары ла бар. Әйтәйек, нимә өсөн кәрәк булған аҫаба башҡортҡа йондоҙҙарҙы исемләп аңлатыу тәғлимәте? Етмәһә, Ислам дине, ғөмүмән, йондоҙҙарға, ырым-ышаныуҙарға бәйле һәр төрлө күрәҙәлекте инҡар итә. Был аңлашыла ла, сөнки алдағы көндәрҙә нимәләр булырын бер Хоҙай ғына белә, ул ғына билдәләй, был осраҡта йондоҙҙарҙың урынлашыуына ҡарап, киләсәкте алдан әйтеп биреү Унның эшенә ҡыҫылыу, инҡар итеү булып һаналыр ине. Бындай ышаныу, ысынлап та, Ислам дине тәғлимәте буйынса монафиҡлыҡ, оло гонаһ булып иҫәпләнә. Шул уҡ ваҡытта хәҙерге ваҡытта фәнгә, уның ҡаҙаныштарына нигеҙләнгән гидрометеорология хеҙмәтен дә инҡар итә алмайбыҙ. Тимәк, хәҙер беҙ һауа торошон, климат шарттарын алдан билдәләү мәсьәләһенә тик дини ҡунунға таянып ҡына баһа ла бирә алмайбыҙ. Был тәғлимәт кешелектең Ислам дине барлыҡҡа килгәнгә тиклем миллион йылдар һуҙымындағы тәжрибәһенән барлыҡҡа килгән.

Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев әйткән һүҙҙәр ҙә тап шул халҡыбыҙ тарихының тәүге осорона ҡарайҙыр һәм башҡорттар тормошона бәйле йондоҙҙар тәғлимәте лә тап шул дәүергә бәйле икәнлегенә шик юҡ. Тарихтан билдәле булыуынса, кешелек үҙ ғүмерендә бер нисә тапҡыр Туфан һыуы ҡалҡыуы һәм ҡот осҡос ҡоролоҡ мәле кисергән. Ҡайһы бер сығанаҡтар буйынса хатта Сулман дингеҙенең (Кама йылғаһы) кибеүе лә билдәле. Тимәк, ҡоролоҡ беҙҙең ерлектә лә булған, сөнки Ағиҙел - Камаға, ә Ағиҙелде Уралтауҙағы күп йылғалар, шишмәләр, инештәр тулыландыра. Тимәк, ерҙәге барлыҡ йылға-шишмәләр ҡороған бер мәлдә Уралтауҙағы барлыҡ һыуҙар юҡҡа сыҡҡан. Тап шундай, кешелек яҙмышы ҡыл осонда ҡалған саҡта атай-олатайҙарыбыҙ нисек ҡотолоп ҡалған һуң? Дөрөҫ, уларҙы йондоҙҙарҙы яҡшы белеүе ҡотҡарып ҡалған. Был хаҡтағы мәғлүмәтте мин күптән инде мәрхүм булған билдәле шағир, үҙен ҡанбаба тип атаусы мәшһүр ғалим Рәшит Әхтәриҙән ишеттем. Ул күп кенә йондоҙҙарҙың башҡортса атамаларын белә торғайны. Уның һөйләүенсә, атай-олатайҙарыбыҙ йондоҙҙарҙың урынлашыуына, күсеп йөрөүенә ҡарап, 12 йыл алдан ҡоролоҡ килерен белгән. Ҡоролоҡто икенсе төрлө "ҡарағыш" тип атағандар, йәғни йәйен - ямғыр, ҡышын ҡар яумауы һөҙөмтәһендә йылғаһыуҙар, үлән-ағастар ҡороп, ергә ҡарағыш килгән (кешене ҡарғау, ҡарағыш теләүҙән "ҡарғыш" һүҙе барлыҡҡа килгән - **Ә.Ғ-Ү.**).

Шунан һуң 12 йыл буйына үләт йылдарына әҙерлек башланған. Ҡарағышты үткәрер өсөн киптереү, ҡаҡлау юлы менән һәр төрлө ит, һөт, бойҙай ризыҡтары әҙерләгәндәр, хатта һалҡын мәмерйәләрҙә һыу запасы туплауға ла өлгәшкән атай-олатайҙарыбыҙ. "Ҡарағыштар иң күбендә дүрт йылға һуҙылған, тап шул саҡта запас ризыҡ беҙҙе һаҡлап ҡалған да инде..." ти ине Рәшит ағай. Икенсе яҡтан ҡарағанда, башҡорт милли ризыҡтарының күбеһенең киптереү, ыҫлау, ҡаҡлау юлдары менән әҙерләнеүе лә күп нәмә хаҡында һөйләй. Тамаҡ тамуҡҡа төшөрә шул.

Бында М.Өмөтбаев яҙған һүҙҙәрҙең мәғәнәһе милләтте һаҡлар идея-тәғлимәт булараҡ та асыла. Әлбиттә, уның әйткәндәренең үҙ сығышыңды, ырыуыңды, риүәйәттәрҙе һәм өләндәрҙе белеү шарты ла мөһим. Әммә йондоҙҙарҙы белеү халҡыбыҙҙы аслыҡтан һәм башҡа күп төрлө тәбиғәт һәләкәттәренән ҡотҡарған. Ә бит күпме көслө ҡәүемдәр фәҡәт йондоҙҙарҙың телен аңламауы арҡаһында тарих арбаһынан төшөп ҡалған, юҡҡа сыҡҡан. Тамаҡ, дөрөҫөрәге, алдан тамаҡ хәстәрләмәү уларҙы тамуҡҡа төшөргән,

"Тамаҡ тамуҡҡа төшөрә" әйтеменең икенсе бер мәғәнәһе лә бар. Ул - кешене тамаҡ хаҡына тамуҡҡа төшмәҫ өсөн иҫкәртеү, йәғни тәүге осраҡта әйтелгәнсә, тамаҡ хәстәре алдан күрелеп, аслыҡ менән осрашҡандан һуң кеше тамаҡ хаҡына үҙен һәләк итергә тейеш булмау шарты. Миҫал өсөн үҙ ерендә йәшәүсе бер ҡәүемде көҙ алдына килтерәйек. Ҡәүем халҡы заманға яраҡлашмайынса, тамаҡ байына, көн хаҡына ерҙәрен сит ҡәүемдәргә һата, ҡуртымға бирә, шул иҫәпкә йәшәй бирә. Ситтәр торған һайын уларҙың ерҙәренә күберәк үтеп инә һәм бер көндө ситтән килеүселәрҙең һаны ерле халыҡтыҡынан артып китеп, аҫаба халыҡтың ергә хоҡуғы бөтөнләй юҡҡа сығып, ул ситтән килеүселәр тарафынан йотола. Тамаҡтың тамуҡҡа төшөрөү механизмын шартлы рәүештә ошо рәүешле итеп аңлатырға мөмкин булыр ине. Был механизмды аслыҡҡа дусар булған кеше ашҡаҙанының һуңғы сиктә ҡәүҙә туҡымалары менән туҡлана башлап, дистрофияға килтереүе менән дә сағыштырып булыр ине. Был, әлбиттә, матур сағыштырыу түгел, әммә беҙ хәҙерге заманда тамаҡ, көн хаҡына атай-олатайҙарыбыҙ ҡан ҡойоп һаҡлап ҡалған ерҙәребеҙҙе үҙебеҙ эшҡәртмәйенсә, ситтәргә һатабыҙ йә 49-ар йылға ҡуртымға бирәбеҙ икән, был күренеш ирекһеҙҙән күҙ алдына баҫа.

Гәзиттең 20-се һанында һүҙ алып барылған "Кәрәгең тирәгеңде йыҡтыра" әйтеме менән дә ауаздаш ул "Тамаҡ тамуҡҡа төшөрә" әйтеме. Беҙҙең илдә етештерелгән тауарҙар донъя баҙарында конкурентлы түгел, шуға күрә беҙ бөгөн кәрәгебеҙ хаҡына тирәгебеҙҙе йығабыҙ, йәғни илебеҙ халҡына тағы ла меңәр йылға етерлек запас сеймалды (газ, нефть, төҫлө металдар, урман һ.б.) тамаҡ байына, көн хаҡына бар донъяға оҙатабыҙ. Тамуҡҡа төшөрәбеҙҙә генә уйламайбыҙ, ахыры...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Мартин Лютер исемендәге университет (Галле, Германия) делегацияһы эш визиты менән Башҡорт дәүләт университетына килде. Сит ил ҡунаҡтары араһында хәҙерге Япония иктисады һәм сәйәсәте буйынса белгес, геология буйынса белгес, социаль география буйынса белгес бар. Осрашыу барышында артабанғы хеҙмәттәшлек тураһында күп идеялар тәҡдим ителде. Улар иҫәбендә - йәйге мәктәптәр, берлектәге конференциялар ойоштороу. Әйткәндәй, Башҡорт дәүләт университеты тәүге килешеүен 1968 йылда Галле ҡалаһында нәҡ Мартин Лютер исемендәге университет менән төҙөгән.

✓Башҡортостанда ауыл хужалығы йәрминкәләре уҙған ял көндәрендә республиканың 18 ҡалаһында үтте. Йәмғеһе 2320 сауҙа урыны ойошторолдо. БР Ауыл хужалығы министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, ике көндә 984 тоннанан ашыу картуф, 608,5 тонна йәшелсә, 76,7 тонна бал, 147 тонна ит һатылған. Дөйөм продукцияның 90 проценттан ашыуы Өфө йәрминкәләренә тура килде. 41 муниципаль райондан килгән ауыл хужалығы тауарҙары етештереүселәре баш ҡаланың 16 майҙанында өфөләләргә йәшелсә, һөт, һөт продукцияһы, бал тәҡдим итте. Өфө халҡы 717,3 тонна картуф, 452,9 тонна йәшелсә, 42,2 тонна бал, 102 тонна ит һатып алды.

✓Өфө спортсыһы Тамара Танһыҡкужина Украинаның Ровно ҡалаһында үткән ҡатын-ҡыҙҙар араһында шашка буйынса донъя чемпионатында еңеүсе булды. Был уның донъя чемпионаттарында бишенсе еңеүе, ул 2001, 2003, 2004, 2007 йылдарҙа ла беренселекте яулағайны. Әлеге донъя чемпионаты, шулай уҡ июлдә Өфөлә үткән донъя Кубогы һөҙөмтәләре буйынса декабрҙә Пекинда үтәсәк Бөтә донъя интеллектуаль уйындарында ҡатнашыу өсөн донъяның иң көслө һигеҙ спортсыһы билдәләнде. Был исемлекте яҡташыбыҙ Тамара Танһыҡкужина етәкләй.

✓Өфөлә инвалид балалар өсөн үҫеш үҙәге асыу идеяһын "Мәрхәмәт" хәйриә мәғариф фонды тәҡдим итте. Ҡала үҙәгендә Цюрупа, 104 адресы буйынса урынлашҡан яңы учреждение 22 сентябрҙә ишектәрен асты. Тәүҙә үҙәктә 3-18 йәштәрҙәге 102 бала шөғөлләнәсәк. Һәр төркөмдә етешәр бала буласаҡ. Кабинеттарҙа музыка, рәсем, бейеү, спорт, актерлыҡ оҫталығы, сит ил телдәре менән шөғөлләнеү өсөн бөтә мөмкинлектәр ҙә бар. Бынан тыш, балаларға психологтар, логопедтар, дефектологтар консультация бирәсәк.

✓ *Тәү ҡарауға тик һандарҙан ғына торған мәғлүмәт артында дәүләттең, илдең нисек үҫеше, ниндәй өлкәнең аҡһауы, нимәләр буйынса күрше төбәктәрҙән алда барып, ниндәйҙәре буйынса артта ҡалыуыбыҙ бик асыҡ күренә.*



*ХАТТА КИ...*

# ОКТЯБРҘӘ БЕҘҘЕ...

## йылы көндәр көтә

**Быйылғы көҙ һәм ҡыш айҙарында ниндәй һауа торошо өҫтөнлөк итәсәк? Ғәҙәттән тыш аномаль күренештәр көтөлмәйме? Журналистарҙың ошо һәм башҡа һорауҙарына "Башҡортостан гидрометеорология һәм әйләнә-тирә мөхитте күҙәтеү" дәүләт идаралығы начальнигы урынбаҫары Людмила Вафина яуап бирҙе.**

Белгес күҙаллауынса, Башҡортостанда октябрь айының тәүге яртыһы йылы һәм ҡоро торасаҡ.

- Дөйөм алғанда, йылылыҡ биреү сезонында норманан юғарыраҡ температура көтөлә. Ғинуарҙа ғына аномаль һыуыҡтар булыуы мөмкин, - тине метеоролог. Ул шулай уҡ һауа торошонда күҙәтелгән былтырғы аномаль күренештәр тураһында ла телгә алды. Уның әйтеүе буйынса, былтыр Рәсәйҙә ҡышҡы температура нормаға яҡын, ә республикала бер градусҡа юғарыраҡ булған. Ноябрҙә норманан 5 градусҡа - юғары, ә февралдә 5 градусҡа түбән һауа торошо күҙәтелгән. "Яҙ еткәс, күрһәткестәрҙе дөйөмләштергәйнек, уртаса күрһәткес нормаға тап килде. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, беҙ оҙаҡ ваҡытты үҙ эсенә алған күҙаллауҙар яһай алмайбыҙ, сөнки улар менән Мәскәүҙә шөғөлләнәләр. Ә Мәскәү күҙаллауҙары уртаса 60-70 процентҡа ғына тормошҡа аша. Оҙайлы прогноздар, ғәҙәттә, дөрөҫкә сыҡмай һәм ҙур территорияларға иҫәпләнгәнгә күрә, дөйөм атмосфера фонын ғына билдәләргә ярҙам итә, - тине Людмила Анатольевна.

Кәңәшмәлә метеорологтарҙың проблемалары ла аталды: заманса ҡорамалдар етешмәүе Башҡортостанда ғына түгел, бөтә Рәсәйҙә лә киң таралған проблема. "Һауа торошон теүәл билдәләү өсөн тағы нисә йыл, нисә быуат ваҡыт кәрәк буласаҡ?" тигән һорауға кәңәшмәне алып барыусы: "Аныҡ ҡына әйтеүе ҡыйын, шулай ҙа күп ваҡыт кәрәк булыр әле", - тип яуапланы.

Бөтә донъя метеорологтары берләшеп, бына инде нисәмә йыл Ер шарындағы һауа массаларының хәрәкәтен бергәләп өйрәнә, мәғлүмәттәрҙе лә бер-береһе менән бушлай бүлешә. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, һауа торошон бер йыл, хатта бер ай алдан күҙаллау әлегә мөмкин булмаған мәсьәлә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡорттарҙағы быуындан-быуынға, атананулға һынамыштар рәүешендә тапшырыла килгән аҡыл бөгөнгө көндә лә онотолмаған: һынамыштар юҡ-юҡта ололар ауыҙынан ишетелеп ҡуя. Шулай ҙа технократик үҫеш барышында беҙ һауа торошон приборҙар ярҙамында ғына билдәләүҙе яйға һалғанбыҙ ҙа, халыҡ һынамыштарына иғтибар бирмәйбеҙ һымаҡ. Хәйер, кемдәр уларҙы белә, был йөшерен ғилемен тормошта ҡуллана түгелме? Беҙ халҡыбыҙ араһындағы һәүәҫкәр фенологтарға мөрәжәғәт итәбеҙ: зинһар, үҙегеҙҙең күҙәтеүҙәрегеҙҙе беҙҙең уҡыусылар менән дә уртаҡлашығыҙ әле. Хаттар көтәбеҙ.**

Илгизәр БУЛАТОВ әҙерләне.

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

**Британия империяһының Премьер-министры XIX быуатта үҙенә, ил менән һөҙөмтәһеҙ идара итә, тигән нахаҡ яла яғылғас, ҡулында булған статистик дәлилдәр килтереп, был ғәйепләүҙәрҙе кире ҡаҡҡан һәм ошо һүҙҙәрҙе әйткән. Август һуңында Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов үҙенең блогында статистика тураһында тема асҡас, ундағы фекер алышыуҙар ҙа төрлө юҫыҡта барҙы: кемдер уларҙы ялған һандар килтереүҙә ғәйепләне, кемдер ысынбарлыҡты белергә теләне, кемдер шул тиклем һандарҙың осона нисек сығып була икәнлегенә аптыраны, бәғзеләр серле һандарға ышанмаҫҡа саҡырҙы, шулай уҡ статитстика мәғлүмәттәренең ете ҡат йоҙаҡ артында булыуына зарланыусылар ҙа табылды.**

# АЛДАУ БАР, ҘУР АЛДАУ БАР...

## Әммә статистика ла бар!



Нисек кенә булмаһын, Дәүләт статистикаһы федераль хеҙмәтенең Башҡортостан Республикаһы буйынса территориаль органы етәкселеге ошо көндәрҙә барлыҡ уйҙырмаларға нөктә ҡуйыу маҡсатынан киң мәғлүмәт саралары журналистары өсөн "Асыҡ ишектәр көнө" үткәрҙе.

- Статистика яйлап шлюздарҙы аса һәм мәғлүмәт халыҡҡа еткерелә бара. Әммә уларҙың ҡайһы берҙәре үҙҙәрендә конфиденциаллек һаҡлай, мәҫәлән, эшҡыуарҙарҙың отчеты, халыҡ иҫәбен алыуҙағы шәхси мәғлүмәттәр. Ундай мәғлүмәттәр статистика органдарына эшкәртелә һәм өсөнсө кешеләргә таратылмай, был закон тарафынан нығытылған, - тине Башҡортостанстат идаралығы етәксеһе Әкрәм Ғәниев. - Ләкин беҙ күптәрҙең аңында һаҡланған, статистика мәғлүмәттәре ябыҡ, мәғлүмәттәр дөрөҫ түгел, тигән күҙаллауҙарҙы бөтөрөргә тейешбеҙ. Ялған мәғлүмәт биреүҙә төп фактор булып кеше тора. Бының өс сәбәбе бар: беренсеһе - тәүсығанаҡ. Кеше, шул уҡ эшҡыуар булһынмы ул, йәки ниндәйҙер һорау алыуҙа ҡатнашһынмы, яуабы ысынбарлыҡҡа тап килмәй икән, тимәк, статистика мәғлүмәттәре лә дөрөҫ булмай. Икенсеһе - ойошторооу-методологик сәбәп. Мәҫәлән, халыҡ иҫәбен алыу осоронда бөтөн шарттар булдырылһа ла, ҡайһы берәүҙәр был процеста бөтөнләй ҡатнашманы. Улар иҫәптә булһа ла, улар хаҡындағы мәғлүмәт юҡ. Өсөнсөһө - мәғлүмәттәрҙе эшкәрткәндәге механик хаталар. Йәмәғәтселек фекерен формалаштырыуҙа киң мәғлүмәт саралары ҙур роль уйнай, шуға ла беҙ бөгөн журналистар менән осрашып, аралағы аңлашылмаусылыҡтарҙы асыҡларға ниәтләнек...

Был ниәтте журналистар ҙа хупланы һәм статистарға төрлө һорауҙар яуҙырҙы. Мәҫәлән, ҡулланыу хаҡтары индексы нисек иҫәпләп сығарыла? Был һорауға яуап биреп, бүлек мөдире Венера Ғайнанова бөгөн хаҡтарҙы барлыҡҡа килтереүҙең механизмы үҙгәреүен белдерҙе. Бөгөн халыҡ өсөн иң мөһиме булып ҡулланыу хаҡтарының индексы (ИПЦ) тора. Сөнки ул илдәге инфляция процестарын асыҡ күрһәтә. Рәсәй буйынса 271 ҡалала ИПЦ-ны билдәләү өсөн тикшереныеүҙәр алып барылһа, Башҡортостанда ул дүрт мегаполиста, шул иҫәптән Өфөлә, тормошҡа ашырыла. Махсус тикшереүселәр ай һайын билдәле урындарҙа махсус терминалдар буйынса 522 төр тауарҙың, шул иҫәптән 126 атама аҙыҡ-түлектең, 290 атама аҙыҡ-түлек булмаған продукттың, 106 атама хеҙмәт күрһәтеүҙең хаҡтарын күҙәтеп тора.

Шулай уҡ эш хаҡтарының уртаса күрһәткесе лә халыҡта һаман да аптырау тыуҙыра. Кемдер минималь эш хаҡы ала, кемдер - 100-әр меңләп. Әммә статистика Башҡортостан буйынса уртаса эш хаҡы 17-18 мең тип раҫлай. Ирекһеҙҙән, барлыҡ эш хаҡын ҡушып, эшселәр һанына бүләләр ҙә, уртаса эш хаҡы килеп сыға, тигән фекер нығынғайны йөмғиәттә. Бәхтинәң, статистика өлкәһендә эшләүселәрҙең был йәһәттән дә үҙ механизмы бар икән: уртаса эш хаҡын иҫәпләгәндә төрлө өлкәләге хеҙмәткәрҙәрҙең килеме билдәле процент нисбәтендә алынып, һуңынан уртаса күрһәткес сығарыла. Бөгөн Башҡортостан уртаса эш хаҡы буйынса Волга буйында 5-се урынды биләй. 2000 йылдан алып ҡарағанда, республика хеҙмәткәрҙәренең "әсе тире" Рәсәйҙең уртаса күрһәткесенән даими 22 процент самаһына кәмерәк баһалана икән. Эш хаҡындағы тотҡарлыҡтарға килгәндә инде, Башҡортостан буйынса бөгөн 110 млн самаһы тәшкил итә һәм бында кәмеү тенденцияһы күҙәтелә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Статистика - ул дәүләтте өйрәнеү", тигәйне үҙ сығышында Әкрәм Мөхәммәт улы. Ысынлап та, тәү ҡарауға тик һандарҙан ғына торған мәғлүмәт артында дәүләттең, илдең нисек үҫеше, ниндәй өлкәнең аҡһауы, нимәләр буйынса күрше төбәктәрҙән алда барып, ниндәйҙәре буйынса артта ҡалыуыбыҙ ентекләп иғтибар иткәндә бик асыҡ күренә. Тимәк, 200 йыллыҡ тарихы дәүерендә даими ҡыҫҡартылыуҙарға дусар булһа ла, статистика органдары бөгөн дәүләттең артабан йәшәүгә һәләте бармы, юҡмы икәнлеген асыҡ күрһәтеп тороусы анализ. Шуға ла уға йышыраҡ иғтибар итеү, теләһәк тә, теләмәһәк тә - көн талабы.**

Зәйтүнә ӘЙЛЕ.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓27 сентябрҙә Өфөнөң Октябрь районы Пенсия фонды идаралығында (Р. Зорге урамы, 33) Бөтә Рәсәй Пенсия грамоталылығы көнө билдәләнәсәк. Идаралыҡ белгестәре менән осрашыуға Башҡорт медицина колледжы студенттары саҡырылған. Буласаҡ медиктарға пенсияның нисек тәғәйенләнеүе һәм түләнеүе хаҡында мәғлүмәт биреләсәк.

✓Башҡортостандың баш ҡалаһында биләмәне санитар таҙартыу һәм төҙөкләндереү айлығы дауам итә. Бер аҙна эсендә генә, 12-18 сентябрҙә, ҡаланы таҙартыу һәм төҙөкләндереү буйынса сарала 68 мең кеше ҡатнашҡан. Яҡынса ике мең берәмек махсус техника ҡулланылған. 7500 квадрат метрҙан ашыу ҡала юлы, 700 погон метр тирәһе ҡойма, 1500 квадрат метр фасад ремонтланған. Үткән аҙнала ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтары полигонына сығарылғын сүп-сар күләме 16 мең кубометрҙан ашыу тәшкил иткән. 24 сентябрҙә Өфөлә көҙгө дөйөм ҡала өмәһе үтәсәк.

✓Өфө йорттарына тиҙҙән йылы бирәсәктәр. Был хаҡта Өфө ҡала округы хакимиәтенең беренсе урынбаҫары Владимир Дмитрюк журналистар менән осрашыуҙа белдерҙе. Кәңәшмәлә билдәләнеүенсә, йылылыҡ биреүгә әҙерлек эштәре планға ярашлы башҡарылған, һыуыҡтар башланыу менән ҡалаға йылылыҡ биреләсәк. Мәғлүм булыуынса, мәктәпкәсә учреждениелар һәм уҡыу йорттары, дауаханалар һәм бала табыу йорттары, ихтыяждан сығып, бөгөндән үк йылылыҡ ала башлауы мөмкин. Быны өсөн етәксе тарафынан ғариза яҙылырға тейеш.

✓"Милләт кросы-2011" ("Кросс нации-2011") ярыштары быйыл 25 сентябрь ҡаланың М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры янында үтәсәк. Өфөлә был ярыштар һигеҙенсе тапҡыр үткәрелә. Быйыл унда 10 мең кеше ҡатнашасаҡ. 12 сәғәттә Зәки Вәлиди-Аксаков-Пушкин-Театральная урамдары аша һалынған маршрут буйынса йүгереүгә старт биреләсәк. Ярышта Олимпиада чемпиондары, төрлө ойошмалар етәкселәре, мәктәп уҡыусылары, студенттар, ойошмалар хеҙмәткәрҙәренең һәм спорт ветерандарының ҡатнашыуы көтөлә. "Милләт кросы-2011" шулай уҡ Стәрлетамаҡ, Октябрьский, Салауат, Белорет, Туймазы, Сибай ҡалаларында ла үтәсәк.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ОЖМАХМЫ?

## Ул әсәләрҙең аяҡ аҫтында

**Бер ваҡыт бер әҙәм Мөхәммәт бәйғәмбәргә килеп, туғандары араһынан иң тәүҙә кемгә ул иң яҡшы мөғәмәләлә булырға тейешлеген һораған. Бәйғәмбәр уға: "Әсәйеңә", - тип яуап биргән. Кеше: "Ә һуңынан кемгә?" - тип һораған. Бәйғәмбәр: "Әсәйеңә", - тип яуаплаған. "Ә шулай ҙа унан һуң кемгә?", -тип ныҡышҡан кеше. "Әсәйеңә", - тип яуаплаған Бәйғәмбәр. Бары тик һорау дүртенсе тапҡыр ҡабатланғас ҡына Бәйғәмбәр: "Атайыңа", - тип яуап биргән. Ошо хәҙистән күренеүенсә, был донъяла һәр кем өсөн иң бөйөк зат - Әсә!**

**Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры Азамат Илембитов рәйеслегендә V Бөтә Рәсәй Әсәләр форумына әҙерлек буйынса ойоштороу комитетының ултырышында ла һүҙ тап ошо хаҡта барҙы.**



Бындай форум беренсе тапҡыр 2004 йылда уҙғарыла. Уның тәүге икеһе - Мәскәүҙә, өсөнсөһө - Санкт-Петербургта, дүртенсеһе Ульяновскиҙа үтә. Быйыл 15-16 ноябрҙә уның сираттағыһына Башҡортостан үҙ майҙанын бирәсәк. Әсәләр форумының инициаторы булып "Әсәй" мәрхәмәтлек фондтарының Халыҡ-ара йәмғәт ассоциацияһы тора.

- Башҡортостан бындай ҙур масштабтағы социаль әһәмиәтле сараларҙы уҙғарыу тәжрибәһенә эйә. Майҙа VII "Рәсәй ғаиләһе" Халыҡ-ара конгресы үткәрелһә, Халыҡ-ара балаларҙы яҡлау көнөндә Беренсе канал ҡатнашлығында "Беренсе бул!" тип аталған мәрхәмәтлек акцияһы уҙҙы, - тип билдәләне үҙ сығышында Азамат Фәттәх улы.

- Бынан тыш, Башҡортостан күп балалы әсәләрҙе "Әсәлек даны" миҙалы менән бүләкләүсе һәм Әсә йылын үткәреүсе Рәсәйҙең берҙәнбер субъекты. Бөгөн миҙал менән наградланыусы әсәләр һаны биш меңдән артып киткән. Тимәк, республикала күрһәтерлек, тәжрибә уртаҡлашырлыҡ эштәр бар. Өҫтәүенә, әле ҡуҙғалған форум әсәлекте һәм балалыҡты яҡлау буйынса федераль кимәлгә закондар сығарыу инициативаһы менән сығыу трибунаһы ла булып тора. Сөнки Башҡортостанда ошо өлкәлә сығарылған һәм ғәмәлдәге закондарҙың ҡайһы берҙәренең Рәсәйҙә аналогы юҡ.

Форумдың бурыстары һәм маҡсаттары менән ойоштороу комитеты рәйестәше, "Әсәй" мәрхәмәтлек фондтарының Халыҡ-ара йәмғәт ассоциацияһы президенты Рәис Радиус улы Атанғолов таныштырҙы. "Әле ултырыш алдынан гына күптәнге танышым менән осрашып, һөйләшеп торҙоҡ. Хәлдәрен һорағас: "Күрәшәбеҙ!", - тип яуапланы. Беҙгә күрәшергә түгел, ә мөхәббәттә йәшәргә кәрәк. Мөхәббәт булһа, ышаныс, иман була. Ышаныс, иман булған илдә рухиәт ныҡый. Һәм быларҙың сығанағы булып Әсәй тора", - тип, ул Һиндостанда уҙған форумда ил президентының, рөхсәт һорап, үҙ сығышын әсәһенә арнап яҙған шиғырын уҡыуҙан башлауын һөйләне. Кеше ниндәй генә вазифа биләмәһен, ниндәй генә дәрәжәләргә эйә булмаһын, ниндәй генә юғары сараларҙа ҡатнашмаһын, Әсә уның өсөн иң бөйөгө булып ҡала. Шуға ла форумдың Әсә көнө алдынан ойошторолоуы ла юҡҡа түгел. Уға тиклем республиканың һәр районында һәм ҡалаһында делегаттар һайлау йыйылыштары уҙасаҡ, ҡатын-ҡыҙҙарҙың күкрәк яман шешен иҫкәртеү буйынса акциялар уҙғарыласаҡ. Унда төбәктәр буйынса 1 - 29 октябрҙә 35 йәш һәм унан өлкән йәштәгеләргә тикшереү ойошторорасаҡ.

Шулай уҡ ултырышта форумдың эмблемаһы буйынса ла фекер алышынды, ойоштороу комитетына тәҡдим ителгән проекттар араһында иң күп тауыш йыйған эште артабан камиллаштырырға ҡушылды. Сараның программаһына килгәндә, ул бик бай буласаҡ. Көн ярым эсендә 550 делегат (150 кеше - Рәсәй төбәктәренән, 400 кеше Башҡортостандың район-ҡалаларынан саҡырыласаҡ) пленар ултырышта, алты секция эшендә ҡатнашасаҡ. Ҡунаҡтарға киске Өфө буйлап экскурсия ойоштороласаҡ. Йомғаҡлау ултырышында мөһим ҡарарҙар ҡабул ителәсәк, сараға арнап уҙғарылған конкурстар еңеүселәре бүләкләнәсәк. Бер ҡорға йыйылған әсәләрҙе ҡайтыу юлына балаларҙың шат тауыштары, көләс йөҙҙәре оҙатасаҡ - форум республиканың төрлө мөйөштәренән йыйылған һәләтле балалар концерты менән тамамланасаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Аттан ала ла, ҡола ла тыуа, тиһәләр ҙә, һәр йән эйәһен тыуҙырған әсәһе була. Кешенең ниндәй булыуына ҡарамаҫтан, хатта барлыҡ дуҫтары, таныштары йөҙ борғанда ла, баш тартҡанда ла йәки кеше үҙе башҡаларҙы танымаҫлыҡ бейеклеккә күтәрелгәндә лә, бары тик Әсә генә уға тоғро булып ҡала, бары тик Әсә генә уны һаман ярата, уның өсөн борсола, хәстәрлек күрә, төн йоҡоларын йоҡламай... Юҡҡа ғына ожмах - әсәләрҙең аяҡ аҫтында, тимәйҙәр. Ожмах эргәбеҙҙә саҡта уның ҡәҙерен белеп ҡалһаҡ икән.**

**Земфира ХӘБИРОВА.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ПЕНСИЯ ХӘЛДӘРЕ ТУРАҺЫНДА...

## йомғаҡлау һүҙе әйтелде

**Мәскәүҙә Рәсәй Федерацияһы Пенсия фонды етәксеһе Антон Дроздов рәйеслегендә Пенсия фонды идараһы ултырышы булып үтте, унда киләһе осорға бурыстар билдәләнде.**

2011 йылда бөтә пенсия һәм пособиелар ҙа ваҡытында һәм тулы күләмдә түләнде. 1 февралдә 36,6 миллион пенсионерҙың, шул иҫәптән Башҡортостанда йәшәүсе 963 мең кешенең хеҙмәт пенсияһы 8,8 процентҡа индексацияланды. 1 апрелдә социаль пенсиялар 10,27 процентҡа индексацияланды, ә айлыҡ түләүҙәр күләме 6,5 процентҡа арттырылды.

Августа 13,5 миллион, шул иҫәптән 232 мең Башҡортостан Республикаһында эшләп йөрөүсе пенсионерҙарҙың хеҙмәт пенсияларына төҙәтмәләр индерелде. Ғинуарҙан Рәсәй Пенсия фонды элек күмер сәнәғәте өлкәһендә эшләгән 61,9 мең кешенең пенсияһына өҫтәмә түләү тәғәйенләне. Башҡортостанда ундайҙар 228 кеше, уртаса өҫтәмә түләү беҙҙә 1360 һум тәшкил итте. Башҡортостанда 1 июлгә ҡарата ҡартлыҡ буйынса уртаса хеҙмәт пенсияһы 8300 һум, социаль пенсия - 5195 һум, хәрби яралар әҙәмтәһендә инвалидтарҙың - 21,5 мең, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларҙың пенсияһы 21,2 мең һум тәшкил итә.

Социаль һәм хеҙмәт пенсияларының планда ҡаралған өҫтәмәләренән тыш, 2011 йылда Рәсәй Пенсия фонды төбәк пенсионерҙарының пенсияһына социаль өҫтәмәләр тәғәйенләүҙе дауам итте. Республикала федераль социаль өҫтәмә алыусылар бөтәһе 94330 кеше.

2011 йылда Пенсия фонды страховка взностарын мотлаҡ пенсия һәм медицина страховкалауына йүнәлтеү эшен дауам итте. Йыл башынан Башҡортостан буйынса мотлаҡ пенсия страховкалауға 37,7 млрд. һум аҡса килде, был былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 45,7 процентҡа күберәк. Мотлаҡ медицина страховкалауға иһә 4,3 млрд. һум аҡса теркәлде.

Ҡалалар һәм райондарҙағы һәр бер Пенсия фонды идаралыҡтарында консультация пункттары асылды. Бында түләүселәргә отчет төҙөргә, түләүҙәрҙе тикшереп, сағыштырып ҡарарға өйрәтәләр, пенсия законы буйынса аңлатмалар алырға ярҙам итәләр.

Идара ултырышында Рәсәй Пенсия фондының 32 бүлексәһендәге "Клиент хеҙмәте" һәм "Пенсия документацияһына идара итеү" программа-техник комплекстарының ыңғай эш тәжрибәһе билдәләнде. Рәсәй Пенсия фондының Башҡортостан бүлексәһе Рәсәйҙә тәүгеләрҙән булып бындай комплекстар файҙаланыуҙы 69 ҡала һәм районда индерҙе.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**РФ Пенсия фонды башлығы Антон Дроздов әйтеүенсә, илдә хеҙмәт пенсияһы 2012 йылда 9,6 процентҡа күтәреләсәк. Был ғәмәл ике этапта - 1 февралдә һәм 1 апрелдә башҡарыласаҡ. Социаль пенсиялар иһә 14,1 процентҡа артасаҡ.**

**РФ Пенсия фонды Башҡортостан бүлексәһенең матбуғат хеҙмәте.**

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

## ҺЫРҒАНАҠ

**Һырғанаҡ (облепиха) емеше бик файҙалы. Ундағы С һәм Р витаминдары ҡан тамырҙарын нығыта, уларҙың һығылмалылығын күтәрә. А витамины эңерҙә күҙ күреү һәләтен яҡшырта. Бынан тыш, һырғанаҡ тирене матурайта, йөрәк эшмәкәрлеген яйлай, ағыуланған организмды таҙарта.**

15 микроэлементтан (тимер, магний, марганец, алюмин, кремний, бор, көкорт һ.б) башҡа, уның составында тағы В1, В2, В9 (фолий кислотаһы) һәм К, Р витаминдары төркөмдәре бар. Һырғанаҡты йыш ашаған кешелә инфаркт, инсульт булмай, иммунитет күтәрелә. Ундағы Е витамины бала таба алмаған ҡатындарға файҙалы, ул шулай уҡ түлһеҙ ирҙәргә лә ярҙам итә. Һырғанаҡ майлы емеш, шуға ла уны самаһын белеп ашарға кәрәк, көнөнә 1 ҡалаҡ етә. Теш ҡаҙнаһын нығытыу өсөн япраҡтарын сәй итеп эсергә була. Япраҡтарынан эшләнгән төнәтмә быуындар ауырығанда ла файҙалы. Бының өсөн 1 ҡалаҡ ваҡланған япраҡты 1 стакан һыу менән 10 минут ҡайнатҡас, көнөнә ике тапҡыр ярты стаканлап эсергә. Составында тимер булғанлыҡтан, һырғанаҡ емешен ашау аҙ ҡанлылыҡтан, хәл бөтөп киткәндә файҙалы. Япраҡтары, емеше менән бер рәттән, һырғанаҡтың ҡайырыһын да дарыу итеп ҡулланырға була. Ҡайырыһы яман шеш, япраҡтары быуындар ауырыуы, ревматизм булғанда ҡулланыла. Һырғанаҡ майы бешкән тирене дауалай, оҙаҡ ауырып ятҡан кешеләрҙең янбаш тиреһе боҙолоп китһә, шулай уҡ һырғанаҡ майы ярҙамға килә. Һырғанаҡтың емешен, һутын ашҡаҙан һуты түбән булғанда, бауыр күҙәнәктәрен яңыртыу, бауыр ағыуланыуын бөтөрөү өсөн ҡулланалар. Һырғанаҡ майын ашҡаҙан һуты юғары һәм ашҡаҙандың сей яраһы булғанда, көнөнә 2 тапҡыр 1-әр ҡалаҡлап эсергә. Дауаны 10 көн дауам итһәң, сей яра йүнәлә. Был май бит тиреһенә һөртөү өсөн дә уңайлы. Тире майлы булһа ла, ҡоро булһа ла, был май файҙалы, сөнки уның составында каротин бар. Тырнаҡтар тиҙ һыныусан булғанда тырнаҡтарығыҙға һөртөгөҙ, шулай уҡ эскә лә ҡабул итегеҙ. Сәстәрҙе йыуыр алдынан 2 сәғәт алда баш тиреһенә һөртһәң, сәстәр матурлана. Һырғанаҡ майын өйҙә лә эшләргә була: һутын һығып алғас, ҡалған массаны духовкала 60 градус йылылыҡта киптерергә лә, иҙергә. Был массанан ике тапҡыр күберәк рафинадланған көнбағыш майы ҡойоп болғатырға һәм 2 аҙна бүлмә температураһында торорға. Унан шыйыҡсаһын ҡойоп алып, тотонорға, һауыт төбөндә ҡалғанын ташларға.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**




# МИЛЛӘТ ТӘРБИӘЛЕ,

## ҡатындары тәрбиәле булһа

**Ислам дине өйләнеү мәсьәләһен иң бөйөк дәрәжәгә ҡуйып, ғаилә төҙөүҙе дәүләт төҙөү әһәмиәтендәге ваҡиға һанап, был турала бик күп ҡағиҙәләрҙе алға ҡуя. Ғаилә ҡағиҙәләрен алдан белеп, ваҡыты еткәндә уларҙы ҡулланған кешеләр, үҙ ғаиләләренең әҙәп үә сәйәсәт хәлдәрен күркәм итеп төҙәр, икенсе төрлә әйткәндә, "ғаилә" тип аталған кескенә дәүләттә идара итеү юлын табыр. Ғаилә төҙөү хаҡындағы әҙәптәрҙе белеү үә тормошонда уға яраштырыу - мосолмандар өсөн иң мөһим эштер. Сөнки ғаилә хәлдәре төҙөк булмаған, тәрбиә ысулына нигеҙләнмәгән хәлдә, ни ҡәҙәр бөйөк булһа ла, һис бер милләт донъяла йәшәмәҫ. Ғаилә ҡағиҙәһеҙ булһа, уның яман тәьҫире бөтөн милләткә таралыр, шул сәбәпле өҫтөнлөк урынына - түбәнлек, алға барыу урынына артта ҡалыу кисерелер. Ризаитдин Фәхретдин үҙенең яҙмалары аша халҡыбыҙҙың күп быуаттар дауамында йәшәп килгән ғаиләләгә тәрбиә сараларын, күп төрлө күркәм ғөрөф-ғәҙәттәрен, ата-баба йолаһы буларак быуындан-быуынға күсеп һаҡланып ҡалған матур өлгөләрҙе, ғөмүмән, халыҡ педагогикаһы өлгөләрен бергә туплап, халыҡтың үҙенә ҡайтарып биргән. Бөгөн, йәш быуынды тәрбиәләүҙә бик күп ҡыйынлыҡтар тыуған бер осорҙа, мәшһүр ғалимыбыҙҙың был хеҙмәттәре - һәр ғаиләнең өҫтәл китабы булып, үҙенең мөһим вазифаһын үтәр, тигән өмөттә гәзитебеҙҙең һәр һанында "Ғаилә", "Тәрбиәле әсә", "Тәрбиәле ҡатын" китабынан өҙөктәр тәҡдим итәбеҙ.**

### Ир менән ҡатындың шәриғәт ҡушҡанса бергә ҡушылыуынан, йәғни йән һәм тән берлегенән ғаилә төҙөлөр.

Ир кешенең үҙе өсөн бер ҡатын һайлап алыуы - донъяла булған тереклегендә, шатлыҡ үә ҡайғыһында бер иптәш, икенсе һүҙ менән әйткәндә, һәр бер аҡ үә ҡара көндәрендә һыйынасаҡ, ҡайғылы ваҡытта йыуатып, йәнде рәхәтләндерәсәк бер серҙәш табыуы булыр.

Ҡатын кеше - әҙәм балаһында холоҡтарҙы гүзәлләндерергә сәбәп булыуы, ҡаты күңелдәрҙе йомшартыуы үә кешеләрҙең дуҫлашыуҙарына бер сәбәпсе, кешеләрҙе януар түгел, ә кеше итеүсе бер ҡеүәттер. Сөнки дуҫлыҡ үә яҡынлыҡ хеҙмәтләр - ни ҡәҙәр ныҡ булһа ла, уларҙың ғына ғаилә төҙөүгә ҡәҙрәттәре етмәҫ. Шуға нигеҙләнеп, ҡатын - хеҙмәтсе түгел, бәлки ғаиләлер. Был һүҙҙә арттырыу бар, тип уйламағыҙ. Сөнки ирҙәр - ғаиләнең етәкселәре булған хәлдә, ҡатындар етәксенең идара итеүендә булған ғаиләнең нигеҙ терәктәре үә өйҙөң идара итеүселәре булырҙар. Был тәҡдирҙә уларға "ғаилә" тип әйтеү дөрөҫ булыр.

Бөйөк бер заттың әйтеүенә ҡарағанда: ҡатын идараһында булмаған өйгә - "өй" тип әйтеү дөрөҫ булмаҫ, үә ҡатын идараһында булмаған бер өйҙә ултырғандарға ла "ғаилә" тиелмәҫ. Ҡатын яҡшы булыу шарты менән донъя үә әхирәттең бәхетенә беренсе сәбәп булғаны кеүек, һәр төрлө рәхәт тә уның ҡулына ышанып тапшырылғандыр. Изге ҡатын - бөтмәй торған хазина булғаны кеүек, был донъя сәфәрендә иренә юлдаш, мәшәҡәттәрҙә йыуатасаҡ йыуаныс, ауырлыктарҙа таяныс булыр. Изге ҡатын иренең малын һаҡлар. Иренең башына килгән хәсрәттәрҙе һүндереүҙә көсө бөтмәҫ тәҡдирҙә ғәйрәтле бер ғәскәр кеүек ирен йыуатыу тураһында бөтөн ҡөҙрәтен сарыф итер. Күп ваҡыт булыр, ҡайһы бер осраҡтарҙа әйберҙе һаҡ тотоп, һис кемгә һиҙҙермәйсә, аҙмы-күпме мал йыйыр ҙа, иң кәрәкле бер ваҡытта иренә сығарып бирер шатландырыр.

Ҡатын - ғаиләнең терәге, тигәйнек. Әгәр ҙә ғаилә пароходҡа оҡшатылһа, һис шикһеҙ, ҡатын пароходтың ҡойроғона оҡшар. Донъя ҙурлығында булған пароходтар - гиҙеп йөрөүҙәрендә ҡойроҡ хәрәкәтенә эйәргән кеүек, дәүләт миҫалында булған ғаиләләр ҙә - ғаилә эсендә булған ҡатын хәрәкәтенә эйәрәсәк. Ләкин пароход ҡойроғо - башлыҡ ҡушыуы буйынса хәрәкәтләнгән хәлдә, ҡатын фәҡәт үҙенең тәрбиәһенә яраҡлы ысул менән хәрәкәт итерәсәк. Ҡатындары тәрбиәле булған милләт - тәрбиәле; ҡатындары тәрбиәһеҙ булған милләт - тәрбиәһеҙ; ҡатындары тырыш үә идара итеүсән милләт - бай; ҡатындары ялҡау йәки исраф итеүсән милләт фәҡир булыр.

*ТЕЛЕМ, ТЕЛГЕНӘМ...*

**Халыҡты халыҡ итеп һанатыусы төп ижтимағи күренеш - тел ул. Тел тирәһендә халыҡ халыҡ булып ойоша, формалаша. Башҡорт теле беҙҙең милләттең меңәр йылдар дауамында йотолмайынса, үҙ асылын юғалтмайынса йәшәүен тәьмин иткән дә инде. Тел юғалыу, үҙгәреү арҡаһында милли үҙаңдың ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә лә (1-2 быуын ғүмерендә) юйылыуын беҙ күп миҫалдарҙа ап-асыҡ күреп торабыҙ. Төньяҡ-Көнбайыш райондарҙағы, күрше республикаға эләккән биләмәләрҙәге элекке милләттәштәребеҙҙең күбеһен шул уҡ һүҙ менән, йәғни элекке милләттәштәр тип кенә атап була. Уларҙы үҙ асылдарына ҡайтарырға тырышыуыбыҙ ашмаған хыял ғына булып ҡала һымаҡ. Ярай, бөгөнгө һөйләшеү темаһы ул турала түгел, шуға ла был яҡтарҙағы хәлдәргә әлегә теймәй торайыҡ әле.**

# ДӘРЕСТЕҢ БӘҪЕН...

## теория уҡытыу түбән төшөрә



Халҡыбыҙҙың нигеҙен тәшкил иткән, үҙен башҡорт тип һанаған, башҡорт телендә һөйләшкән, һәр хәлдә башҡорт телен туған теле тип һанаған йәш милләттәштәребеҙҙең телде белеү кимәле нисек һуң? Оло үкенес, һыҙланыу менән: "Бик түбән! Ҡот осҡос түбән!"- тип әйтергә генә ҡала. Дәреслектәрҙе тикшереүгә арналған һәр кәңәшмәлә, семинарҙа уҡытыусыларҙың, уҡыу китаптарына ингән әҙәби текстарҙы ябайлаштырырға кәрәк, уҡыусылар аңламай, тигән һүҙҙәре генә лә - ошоно раҫлаусы иң сағыу миҫал. Тел белеү кимәле түбәнәйеүенең сәбәптәре күп. Объектив сәбәптәр ҙә (йәғни беҙҙән тормағандары) етерлек. Мәҫәлән, дәүләт сәйәсәте милли телдәргә генә түгел, дәүләт теле булған урыҫ теленең яҙмышына ла битараф һымаҡ. Милләттәрҙе юҡҡа сығарыу идеялары ла төрлө сәйәсмәндәр ауыҙынан халыҡҡа асыҡтан-асыҡ ишеттерелә килә. Уҡытыу пландарында ла милләттәрҙең үҙ тарихы, ғөрөф-ғәҙәттәрен, әҙәбиәтен, мәҙәниәтен, телен өйрәнеү мөмкинлектәре бик сикләнә.

Ошондай шарттарҙа "Нимә эшләргә һуң?" тигән яуапһыҙ ҡала торған һорау янына "Нисек эшләргә?" тигән һорауҙы ҡуйыу бик урынлы булыр ине.

Башҡорт мәктәптәрендә тел дәрестәре бар, иҫәбе лә, күләме лә етерлек. Бөгөнгө йәштәребеҙҙең мәктәптә уҡыған йылдарына күҙ һирпеп кенә ҡарағанда ла, уларҙың башҡорт телен туған тел буларак аҙнаға 2-3 мәртәбә 10 йыл дауамында өйрәнгәнен күрәбеҙ. Шунса ваҡыт үҙ туған теле серҙәренә төшөнөргә мөмкинлеге булған йәштәребеҙ ни өсөн халҡыбыҙ, телебеҙ киләсәге талап иткән тел белеү кимәленә күтәрелә алмай? Уларҙың күбеһенең телмәр тотоу ҡеүәһе үҫмәгән, һүҙлеге ярлы. Тел һөйөүҙәре, телгә тоғролоҡтары самалы. Ә хаталар һуң? "Мин шул-шул йылда тыуҙым" (тыуғанмын урынына), "Мин был китапты уҡығанмын" (уҡыным урынына) кеүек һәм бүтән йөҙәрләгән төр тел хаталары мәктәп уҡыусылары өсөн генә түгел, юғары белемле журналистар өсөн дә ғәҙәти хәлгә әйләнеп бара. "Дания короллегендә нимәлер серене" тигән кеүек, балаларыбыҙға туған телде уҡытыу нигеҙе тирәһендә лә ниҙер серепята бит. Башҡорт мәктәптәрендә туған тел уҡытыу концепцияһы халыҡ, тел ихтыяжына тап килмәй икән дәһә!

Халыҡты халыҡ итеп һаҡлап ҡалыуҙы тәьмин иткән телебеҙ артабан да йәшәһен һәм уның йәшәүен бөгөнгө һәм киләсәк быуын йәштәре дауам итһен өсөн нимәләр кәрәк? Телде яратыу, уға тоғролоҡ һаҡлау, уның байлығын үҙендеке итеү, тел менән файҙалана белеү, телдең образлылығын үҙләштереү... Ғәмәлдә иһә былар барыһы ла телдең теорияһын өйрәнеү менән алмаштырылған. Башҡорт теле программалары, уларға ярашлы төҙөлгән дәреслектәр ҙә тел өйрәнеүҙе грамматика өйрәнеү менән сикләй, тип әйтерлек. Дәреслектәрҙең һуңғы биттәрҙәге йөкмәткеһенә ҡарау ғына ла уның шулай икәнен асыҡ раҫлай. Шулай булғас, уҡытыусы ла үҙ дәресен теорияны өйрәнеү тирәһенә туплап төҙөй. Был мәсьәләгә икенсе яҡтан ҡарайыҡ әле. Мәктәптә өйрәнелгән һәр белемдең практик әһәмиәте бар. Йәғни ул белем нимәгә булһа ла, ҡасан да булһа кәрәк була, ярап ҡуя. Һәм был ысынлап та шулай. Ә бына башҡорт теленең теорияһын беренсе кластан һуңғы класҡа тиклем йылдан йылы тәфсирләп өйрәтеүҙең ғәмәли әһәмиәтен мин һис кенә лә таба ла, аңлай ҙа алмайым. Унан, был теорияны өйрәтеүен өйрәтергә маташабыҙ ҙа ул, ә уны белеүсе, хәтерендә ҡалдырыусы, иҫендә тотоусы бармы? Ярар, мендән берәүҙең ниҙер хәтерендә ҡалғандыр, бәлки, тик был уға ниндәй өҫтөнлөк бирә лә, уның файҙаһы ниҙә? Ҡасандыр, уҡытыу башҡорт телендә барған саҡта төҙөлгән туған телдәрҙе өйрәтеү концепцияһы бөгөн дә әҙ-мәҙ кәрәкле-кәрәкһеҙ өҫтәлмәләре менән йәшәүен дауам итә. Ул саҡта, бынан 60-70 йылдар элек, башҡорт телен шулай өйрәнеү, файҙаһы булмаһа ла, артыҡ зыян яһай алмай ине. Балалар, бөтә предметтарҙы ла башҡорт телендә уҡығас, туған телен барыбер яҡшы белде. Бөгөн иһә, уҡытыу урыҫ телендә барғанда, туған тел өсөн бүленгән таҡы-тоҡо ваҡытты ла һис ниндәй ғәмәли әһәмиәте булмаған тел теорияһын өйрәнеүгә тулыһынса тип әйтерлек биреү, йомшағыраҡ итеп әйткәндә, ахмаҡлыҡ. Һәм был айыҡ аҡылға һис кенә лә һыйырлыҡ эш түгел.

Теорияны программаға ошолай нигеҙ итеп алыу ҡайҙан килеп ингән һуң? Әлбиттә, урыҫ теле методикаһына эйәреүҙән. Ләкин... Урыҫ теленең методикаһы - ул бик етди фән. Уны формалаштыра башлауҙың хәҙер ике быуатҡа яҡын тарихы бар. Уға Константин Ушинскийҙан башлап йөҙәрләгән, меңәрләгән күренекле ғалим үҙ ғүмерен бағышлаған. Тик урыҫ теле методикаһы, ни тиклем ныҡынған, эшкәртелгән фән булыуына ҡарамаҫтан, башҡорт телен уҡытыуға нигеҙ була алмай. Беренсенән, урыҫ теле менән башҡорт теленең ҡулланыу даирәһе нисбәтен яҡынса ла билдәләп булмай. Беҙҙекенең ҡулланыу сиктәре бөгөн сағыштырып та булмаҫлыҡ аҙ (алда әйткәнебеҙсә, бынан 60-70 йылдар элек хәл шаҡтай яҡшы ине әле). Икенсенән, урыҫ теленең орфографияһын теорияһыҙ үҙләштереп булмай. 300-гә яҡын дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәһе (иҫкәрмәләре менән) туранан-тура теорияға, грамматикаға бәйләнгән.

✓ *"Нисек инде улай, һинең атайың башҡорт ине бит, ә һин татарса һөйләшәһең?" - ти Ғилман Ғирфан улы аптырап. "Әй, Ғилман ағай, мин дә башҡортмон да ул, тик бисә татар бит", - тип аңлата был үҙенең ҡылығын.*



Теорияны белмәйенсә, урыҫ телендә дөрөҫ яҙырға өйрәнеп булмай. Мәҫәлән, күренекле тел ғалимы М.В. Панов, "расчёт" һүҙен, шул уҡ әйтелешкә яраҡлы итеп, 220 төрлө яҙып була, ти (шуларҙың экзотик бер варианты - "розщодт"). Шул йөҙәрләгән варианттан берҙән-бер дөрөҫөн һайлау, табыу өсөн теория ярҙамы кәрәк була ла инде. Бына ни өсөн урыҫ теле дәрестәрендә теория ныҡлы урын алған. Һәм был теория һәр ваҡыт орфографияға бәйләп өйрәнелә. Йәғни бында теорияны теория булған өсөн өйрәтмәйҙәр, ә ғәмәли яҡтан кәрәге өсөн өйрәнәләр. Ә башҡорт телендә дөрөҫ яҙырға өйрәнеү өсөн тел теорияһының әллә ни кәрәге лә юҡ.

Беҙҙең телмәр өндәре һүҙҙең бөтә урынында ла һәр ваҡыт үҙенсә генә әйтелә, йәғни икенсе өнгә тап килмәй. Шуға ла бер өндө икенсеһе менән бутауы мөмкин дә түгел. Ә урыҫ телендә хәл бөтөнләй башҡаса. Был телдең һәр өнө тип әйтерлек икенсе (өсөнсө) өн менән яңғырашы яғынан айыра алмаҫлыҡ тап килеп кенә тора: лук - луг, сделал - здела. А өнө һәр һүҙҙә тигәндәй о, ы, и өндәренә тап килә: вата - надо, пятерка - пилотка. Башҡорт теле бындай тап килеүҙәрҙе белмәй. Боронғо - һуңғы кеүек бер-ике иҫкәрмә миҫал дөйөм хәлде үҙгәртә алмай. Шуға ла башҡорт әҙәби телендә һөйләшергә өйрәнгән, шыма итеп уҡый белгән һәр кем бер ниндәй хатаһыҙ яҙа ала. Был беҙҙең яҙмабыҙҙың иҫ киткес ыңғай үҙенсәлегенә бәйләнгән. Ләкин был турала, йәғни орфографиябыҙ тураһында, яйы сыҡҡанда, икенсе тапҡыр һөйләшербеҙ.

Шулай итеп, ниндәй маҡсат менән телдең теорияһын тәфсирләп-тәфсирләп өйрәтәбеҙ һуң? Ғәмәли әһәмиәте юҡ. Ул теорияны бирәү ҙә хәтерендә ҡалдырмай, ҡалдыра ла алмай. Туған телде өйрәнеү өсөн бирелгән алтын бәрәбәре ваҡыт юҡты юҡҡа бушатып үтә лә китә. Улай ғына булһа әле! Кәрәген үҙең дә аңламаған нәмәләрҙе башҡа тыңҡыслап тултырырға тырышыу туған тел дәрестәренең бәҫен төшөрә, әһәмиәтен кәметә, ауырһыныу тойғолары тыуҙыра. Һөҙөмтәлә башҡорт теле дәрестәре күпселек уҡыусыларҙың бик үк яратып бөтмәгән дәресенә әүерелә. Әле әйткәндәремде бынан бер нисә йыл элек алған мәғлүмәттәрем менән раҫлап ҡуяйым: 70 процент уҡыусы туған тел дәрестәрен ауыр предметтар иҫәбенә индергәйне ул саҡта. Ә ауыр предмет - яратмаған, аңламаған предмет ул. Балаларҙы шул хәлгә еткереү өсөн ни тиклем "көс" һалырға кәрәк. Быны бит үҙебеҙ эшләйбеҙ. Кемдер түгел. Бәләне бында башҡаға япһарып булмай. Телдән биҙеү, уға тоғролоҡ һаҡламау орлоҡтары ошонда һибелмәйме икән?

Телһөйәр илһөйәр ҙә була. Туған тел дәресе уҡыусының һағынып көтөп алған дәресе булырға тейештер, моғайын. Беҙҙең бөгөнгө хәлебеҙ тап шуны талап итә. Яныуҙарыбыҙ, көйөүҙәребеҙ, хәлебеҙсә тырышыуҙарыбыҙ шул ғәзиз телебеҙҙе һаҡлап ҡалыу өсөн түгелме ни?!

Әгәр ҙә дәүләт тарафынан бирелгән ошо бәләкәй генә мөмкинлекте лә беҙ ыңғай йүнәлештә түгел, ә бөтөнләй тиҫкәре һөҙөмтә бирерлек итеп файҙаланабыҙ икән, кемгә дәғүә белдереп дауларға, кемдән ярҙам һорап һөрәнләргә икән? Башҡорт теле дәресе - ул белем биреү дәресе генә түгел. Ул башҡорт мәктәбендә балаларҙа милли үҙаң тәрбиәләү мөмкинлеге ҙур булған дәрес. Уның башҡа дәрестәрҙән төп айырмаһы ла шунда. Шуға күрә туған тел дәрестәренең йөкмәткеһе һәм сифаты уҡытыусыларҙың һәм мәғариф хеҙмәткәрҙәренең генә хәстәре булып тормаһын ине. Халыҡ ихтыяжына тап килеп, уны ҡәнәғәтләндерерлек итеп үткәрелә килгән туған тел дәресе беҙҙе борсоған, хафалы уйҙарға төшөргән, көнделдәребеҙҙе өйкәп торған күренештәрҙең, хәлдәрҙең ныҡлап тамыр йәйеп китмәүен тәьмин итә алыр көскә эйә. Тик уларҙы ошондай кимәлгә бер кеше, айырым бер уҡытыусы ғына еткерә алмай. Был үтә лә мөһим бурысты, башҡорт телен бөгөнгө шарттарҙа туған тел булараҡ уҡытыуҙың өр-яңы концепцияһын төҙөп, һәм уны ҡабул итер алдынан тикшереүҙә ҡатнашырға киң йәмәғәтселекте лә йәлеп итеп кенә атҡарып була.

"Йөрәгендә халҡы булған" бик күптәр туған тел уҡытыуҙың төп йүнәлешен билдәләүгә үҙ тәҡдимен, фекерен индерә алыр ине. Туған тел уҡытыу концепцияһы милли мәҙәниәт нигеҙендә төҙөлөргә тейеш. Сөнки бөтә ыңғай, яҡшы күренештәрҙең башы - мәҙәниәттән. Телде мәҙәниәткә бәйләп өйрәнеү яңы әйбер түгел. Донъяның алдынғы педагогтары, телдәрҙе тап мәҙәни нигеҙҙә өйрәнергә кәрәк, тип күптән раҫлап килә. Әгәр ҙә халыҡтың халыҡ булыуын тел менән бергә мәҙәниәттең дә билдәләүен иҫәпкә алһаҡ, башҡорт телен иҫ киткес бай һәм үҙенсәлекле мәҙәниәтебеҙ ерлегендә өйрәнеү халҡыбыҙ ихтыяжына тулыһынса яуап бирер ине.

**Вәкил ХАЖИН.**
**педагогика фәндәре кандидаты.**

*ХӘТЕРКИТАП*

# ЙОЛАЛАРҘЫ ОНОТҺАҠ...

## мәмерйәгә әйләнеп ҡайтырбыҙ бит

**Ябай халыҡ араһында милли, дини, сәйәси аң тәрбиәләү кимәле бик түбән, юҡҡа тиң хатта. Яңыраҡ Башҡортостан юлдаш каналының "Ысынлап та" тапшырыуындағы сығышында бер танылған журналист-аҡһаҡал иҫкегә йәбешеп ятмаҫҡа, ә алға ынтылыш менән йәшәргә саҡырҙы. Был ысынлап та шулай. Ләкин алға ынтылыш менән йәшәү нисек була һуң? Беҙҙең ниндәй традициялар, йолаларҙы иҫке тип атарға ярай? Минеңсә, был ҡатмарлы һорауҙарға яуап та бирергә кәрәктер, тип уйлайым.**

Яңыраҡ автобуста Баймаҡта тыуып үҫкән, шунда йәшәгән бер урыҫ әбейе менән һөйләшеп киттек. "Беҙ бала саҡта үҙҙәрен матур, мөләйем тотҡан, милли башҡорт кейемендә йөрөгән аҡыллы, баҫалҡы башҡорт әбейҙәре була торғайны, улар күрше-тирә балаларына әкиәт һөйләп, доғалар уҡып, сәй эсерә торғайны. Ә беҙҙең әсәйҙәр: "Ана, башҡорт ҡыҙҙарынан үрнәк алығыҙ, улар ниндәй баҫалҡылар, аҡыллылыр, тыңлаусандар", - тип әйтәләр ине. Ә хәҙер ундай изге әбейҙәр ҙә, нәзәҡәтле ҡыҙҙар ҙа юҡ - барыһы ла бер төҫлөгә әйләнде", - тип, үткәндәрҙе юҡһынып, һағынып һөйләгәйне ул әбей. Ә миңә иһә: "Ҡыҙғанысҡа күрә, һеҙҙең һөйләгәндәр дөрөҫ",- тип ризалашырға ғына ҡалды, сөнки бөгөн оло йәштәге әбейҙәребеҙҙең күптәре сәй урынына икенсе эсемлек эсә, доға урынына таҡмаҡ йырлай. Ә ҡыҙҙарыбыҙ араһында бер ҡулына һыра шешәһе, икенсеһенә тәмәке тотҡандарҙы бик йыш күрергә тура килә. Был нимә, алға ынтылыш менән йәшәүме? Минеңсә, изге, иманлы башҡорт әбейе, нәзәҡәтле башҡорт ҡыҙы - ул беҙҙең милли символыбыҙ. Символдарын юғалтҡан милләт һәләкәткә табан бара. Мин был традиция-символдар мәңгелек булырға тейеш тип уйлайым. Был ҡот осҡос юғалтыуҙың сәбәбе - милли, дини, сәйәси аңдың бик түбән кимәлдә булыуында. Әлбиттә, иҫке, мотлаҡ үҙгәрә торған традициялар ҙа бар, булған, тик улар кем файҙаһына үҙгәртелгән һуң? Бер поляк ғалимы шулай тип яҙа: "Әгәр кешеләр иҫкегә генә, традицияға ғына йәбешеп ятһа, әле лә мәмерйәлә ултырған булырҙар ине, шул уҡ ваҡытта традициянан бөтөнләй баш тартһалар - кире мәмерйәгә әйләнеп ҡайтырҙар ине". Мин ҡартайған аҡылым менән "Беҙ кире шул мәмерйә йүнәлешенә юл тотмайбыҙ микән?" тип тә уйлайым.

"Киске Өфө" коллективына ихтирамым ҙур, шуға күрә минең ҡарашҡа бик мөһим булған тағы бер борсолоуым менән уртаҡлашырға кәрәктер, тим. Шул уҡ Башҡортостан юлдаш каналында "Асыҡларға ваҡыт" тигән тапшырыуҙа ҡатнаш никахтар проблемаһы буйынса фекер алыштылар һәм ҡатнаш никахтар башҡорт файҙаһына түгел, тигән фекергә килделәр. Был ысынлап та шулай: урыҫ менән ҡатнашһаҡ, балаларыбыҙ урыҫ була, татар менән ҡатнашһаҡ, татар халҡын арттырабыҙ. "Ни өсөн?" тигән һорауға бер ҙур, абруйлы ғалимыбыҙ: "Башҡорт милләте ҡартайған (бәлки, был ғалим "боронғо милләт" тип әйтергә теләгәндер? - Ред.), ә рустар, татарҙар - йәш милләттәр", - тине. Белмәйем, кемгә нисектер, мин был фекер менән һис риза түгелмен. Бөтөн төрки донъяһы кимәлендә танылған, тарихта беренсе булып Башҡорт автономияһына һәм Рәсәй Федерацияһына нигеҙ һалыусыбыҙ (әйтегеҙ, тағын ниндәй халыҡтың шундай ғалимы бар!) Әхмәт-Зәки Вәлиди әйтә: "Милләтебеҙ бик ауыр хәлдәрҙә ҡалғанда ла мин күңел төшөнкөлөгенә бирелмәнем, сөнки мин тарихта бөтөнләй бөткән тип һаналған милләттәрҙең, терелеп, үҙ дәүләтен төҙөгән осраҡтарҙы беләм. Һеҙ ҙә күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәгеҙ, ҙур өмөт менән йәшәп эшләгеҙ, телегеҙҙе, динегеҙҙе һаҡлағыҙ", - тип яҙа. Минеңсә, йөҙләгән ырыуҙан ойошҡан данлыҡлы башҡорт милләте мәңге йәш булып ҡаласаҡ, уға ижади эш кенә кәрәк.

Ҡатнаш никахтар борон да булған, киләсәктә лә буласаҡ. Борон ул башҡорт файҙаһына булған. Бөгөн килеп был хәл кире күрнешкә әйләнде, һәм бында беҙ үҙебеҙ ғәйепле. Башҡорт ғаиләһе, никахтары ҡанундарын оноттоҡ. Башҡорт ғаиләһендәге улдар-атайҙар, ҡыҙҙар-әсәйҙәрҙең үҙ-ара мөнәсәбәттәренә, тәрбиәүи ҡанундарына Л. Толстой, В. Даль кеүек аҡыл эйәләре һоҡланған. Ир баланың ниндәй атай булыуына, ҡыҙ баланың ниндәй иманлы, аҡыллы әсәй булыуына ғаиләлә нигеҙ ташы һалына. Был нигеҙ ташын өгөт-нәсихәт менән түгел, ә ғаиләнең - атай-әсәйҙең, олатай-өләсәйҙең һәм башҡа туған-тыумасаларҙың йәшәү рәүеше тәрбиәләй. Бөгөнгө йәшәү рәүешебеҙ ниндәй - балаларыбыҙ шундай.

Иң һуңында бер мәҙәк. Арҙаҡлы егеттәребеҙҙең береһе, Социалистик Хеҙмәт Геройы (Өфөлә йәшәй) Ғилман Ғирфан улы Яҡупов һөйләгәйне. Үҙе оҙаҡ йылдар райком секретары булып эшләп киткән райондың юбилейына саҡыралар уны. Мәжлестә уға ҡаршы ғына ултырған бик күркәм йәш кешегә иғтибар итә һәм унан: "Элек был районда һеҙгә бик оҡшаған бер иптәш менән бергә эшләргә тура килде. Ул һеҙҙең берәр туғанығыҙ түгелме?"- тип һорай. "Ағай, ул бит минең атайым",- тип яуаплай йәш кеше. "Нисек инде улай, һинең атайың башҡорт ине бит, ә һин татарса һөйләшәһең?" - ти Ғилман Ғирфан улы аптырап. "Әй, Ғилман ағай, мин дә башҡортмон да ул, тик бисә татар бит", - тип аңлата был үҙенең ҡылығын. Бына нисек "ҡартая" милләт. Башҡорт ғаиләһен, никах ҡанундарын тергеҙеү буйынса "Киске Өфө"гә лә, бөтәбеҙгә лә эш етерлек икәне аңлашыла инде шулай булғас.

**Сәмерхан ҠУНАФИН.**
**Сибай ҡалаһы.**

*АҒИНӘЙ ҺҮҘҘӘРЕ*

# КӘРӘКМӘГӘН ОҘОН ҺҮҘҘӘН...

## кеше ялыға

- Һаранға мал етмәй, йомарттыҡы һис бөтмәй.
- Барын-юғын һис белмәй - гел май һорай тамағым, тигәндәй, теләнсе лә маҙаһыҙлай һоранып.
- Тәүфиҡлы кейәү - ул табыуға, йүнһеҙе ҡыҙыңды юғалтыуға тиң булыр.
- Йәнлектәргә мәрхәмәтһеҙ бәндә кешеләргә ҡарата ла бәғерһеҙ була.
- Тәбиғәт менән хозурлана белмәгән кеше рухи байлыҡты аңлауҙан мәхрүм зат.
- Төрлө юлдар табып күп көлмәгеҙ - көлөү артында илау бар.
- Гел мыжыуҙан күңел биҙә, кәрәкмәгән оҙон һүҙҙән кеше ялыға.
- Ошаҡсыға, ялағайға ышанма: инһә - ашыңды, сыҡһа - башыңды ашай.
- Иң ҡурҡыныс, ҡыҙғаныс хәл - кешенең үҙ- үҙен алдауы.
- Кешегә насар һүҙ әйтерҙән алда үҙеңә яҡшы һүҙ әйт, насар эштән алда яҡшыһын эшлә.
- Мөстәндең тығылмаған урыны, еҫкәнмәгән ере ҡалмаҫ.
- Йөгө еңел дөйә ятаҡлай, тигәндәй, ялҡау бәндә гел йоҡлай.
- Эскән кеше алдарға ла, һылтанырға ла оҫта, йәшәү маҡсатын, хыялын ергә күмә.
- Ҡырын эш менән ҡыялма - ҡыяҡтай ҡыйылырһың.
- Һыу болғауҙан бутҡа булмай, күп һөйләүҙән аҡыл инмәй.
- Малың күпкә маһайма - күңелең бөтөнлөгөнә ҡыуан.
- Алама ғәҙәт яман сиргә тиң - тәнеңә лә, йәнеңә лә йоғоп бара.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**
**Әбйәлил районы.**

✓ *Бокс башланыр алдынан башҡорт милли кейеме елән һәм ҡамсат бүрек кейеп алып, рингты бер-ике тапҡыр урап сыға. Уны бөтә донъяла тап башҡорт милли кейемендә танызйҙар.*






дыма, тәү сиратта, донъяуи мәсьәләләрҙе хәл итеүгә инвестициялар йәлеп итеү, бағыусылар табыу, ғәриптәр тормошон бер аҙ еңеләйтеү өсөн төрлө юлдар эҙләү маҡсатын күҙ уңында тотам. Балалар һәм үсмерҙәрҙе күберәк спортҡа йәлеп итеү, ылыҡтырыуҙы әүҙемләштереү мөһим. Инвалид балалар үҙҙәренә бикләнмәһен, был донъяла үҙҙәрен артыҡ түгел, ә кәрәкле итеп тойһон өсөн беҙ барыһын да эшләргә бурыслыбыҙ. Әлбиттә, былар эшләнә, ләкин етерлек кимәлдә түгел. Дәүләт Думаһына үткән депутаттарҙың тик береһе генә лә инвалидтарҙың проблемаһын төптән белеп эш итеүсе булһа, ғәҙел булыр ине. Ә унда бөгөнгө көндә был юҫыҡта аныҡ эштәр башҡарыусы депутаттар юҡ тиерлек. Беҙҙең өлкәгә ҡағылған һорауҙар бөтөнләй ҡаралмай, тип әйтеп булмай, ләкин мәсьәләнең асылын, проблеманың төбөн үҙе ғәрип булған кеше генә тулыһынса аңларға һәм хәл итерҙәй юлдар тәҡдим итергә мөмкин, сөнки һау кеше ауырыуҙар һәм ғәриптәр тураһында барыбер ҙә бик уйлай һалып бармай. Аңларға теләмәгәндән йәки ҡул һелтәп ҡарағандан түгел, ә бары тик донъяуи шарттар, ҡанундар шулай ҡоролған. "Кеше хәлен кеше белмәй, үҙ башына төшмәһә", тиҙәр. Хаҡ һүҙҙәр.

Республика Президенты Рөстәм Хәмитов әйткәнсә, сәйәсәттә "үткер тешле" кешеләр кәрәк. Шулай уҡ сәйәсмән халыҡҡа яҡын булырға, уны ишетергә, күрергә бурыслы, сөнки халыҡһыҙ ул бер кем дә түгел. Беҙҙең региондан һайланған депутаттар теше-тырнағы менән үҙ республикаһы мәнфәғәтен яҡларға тейеш. Бөгөнгө көндә был бик актуаль мәсьәлә. Миҫал өсөн "Барьерһыҙ мөхит" федераль программаһын алайыҡ. Был программаға Башҡортостан индерелмәгән, ә башҡа күп төбәктәр бар. Программаны тормошҡа ашырыу өсөн федераль бюджеттан ҙур күләмдә аҡса бүленә, ә аҡса региондарҙа ҙур эштәр атҡарырға булышлыҡ итә. Ә ни өсөн беҙҙең республика был программала юҡ? Беҙҙә юҡмы ул проблемалар? Әлбиттә, бар! Эш бында бары тик беҙҙең депутаттарҙың етерлек кимәлдә эш алып бармауында. Шуға күрә беҙҙең республикаға инвестициялар әҙ инә. Бының өсөн эшләргә лә, "тешләргә" лә кәрәк. Тағы бер моментты билдәләп үтмәй булмай: республикала тыуһалар ҙа, күп йылдар инде ситтә йәшәүселәрҙең йәки республикаға бөтөнләй ҡағылышы булмағандарҙың беҙҙең төбәк мәсьәләләрен төптән белеп эш итә алыуы шикле. Республиканың нисек тын алыуын ишеткән, нисек йәшәүен күргән кеше генә беҙҙең өсөн файҙалы эштәр атҡарырға мөмкин. Сөнки ниндәйҙер мәсьәләне ыңғай хәл итер өсөн ваҡиғаның уртаһында ҡайнау, ошо мәсьәләгә төптән егелеү мөһим.

Кандидаттар араһында йәштәрҙең күп булыуы ҡыуандыра. Киләсәген бөгөндән үк үҙ ҡулына алырға теләгән йәштәребеҙ менән ғорурланырға мөмкин. Уларҙың ошо "ярышҡа" ҡушылырлыҡ көс, дәрт, дарман табыуҙары үҙе үк маҡтауға лайыҡ. Минеңсә, был йәштәрҙең сәйәси киләсәге бар, тип әйтергә була. Тик уларҙың тәүҙә район йәки ҡала, республика кимәлендә "йышылып", сынығыу үтеп, унан һуң федераль кимәлгә барыуы һәйбәтерәк тер, тигән ҡараштамын. Шуға күрә мин дә сәйәси эшмәкәрлегемде республикала башларға иҫәп тотам. Үҙемдең тыуған еремдә ошо юҫыҡтағы мәсьәләләрҙе асыҡ яҡтыртыусы, проблемаларҙы ысынбарлыҡҡа ашырыусы булараҡ танылыу яулап, халҡыма яҡшы сәйәсмән Ирек Зариповты ла таныртырға теләйем. Иң мөһиме рухи сәләмәтлек ҡаҡшамаһын.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөтә донъяға билдәле спортсы менән әңгәмәгә әҙерләнгәндәге тулҡынланыуым уның менән осрашыуҙың тәүге минуттарында уҡ юҡҡа сыҡты. Асыҡ сырайлы, яҡты ҡарашлы, күҙҙәренән осҡон сәсрәп торған, һәр әйткән һүҙен аныҡ миҫалдар менән йөпләп ҡуйыусы егет менән аралашыу еңел дә, мауыҡтырғыс та булды. Бер нәмәгә ҡарамай донъяға һоҡланып һәм шатланып баҡҡан, тормошон үҙ ҡулына мыҡҡып тотҡан, бөтә эшмәкәрлеге оптимизм менән һуғарылған Ирекккә ҡарап һоҡланмау мөмкин түгел. Кешеләге көслө рух та, һынмаҫ ихтыяр ҙа, барыһын да ҡабул итер аң да тик характер ныҡлығы менән ҡуша үрелеп килгәндә генә йәшәй алалыр ул. Башҡорт егете Ирек Зарипов үҙендә нәҡ ошо сифаттарҙың юғары үрнәге тупланғанын аныҡ эштәре менән иҫбат итә лә инде.**

**Гөлназ САФУАНОВА яҙып алды.**

ЯҢЫ РУБРИКА: "БЕҘҘЕҢ ЗАМАН ГЕРОЙЫ"

# АМЕРИКАЛА БАШҠОРТ БУЛЫП ҠАРА ҺИН!

**Беҙҙең заманда геройҙар бармы? Һорауҙы икенсе төрлө бирәйек: бөгөн геройлыҡҡа урын бармы? "Ҡайҙан булһын, юҡ!" тип ҡырт киҫер кемдер. "Салауаттар, Мортазиндар, Вәлидиҙәр заманы артта ҡалған бит инде", тиәсәк икенсе берәү. Өсөнсөләр уйға ҡалыр. Күптән түгел телевидениелағы бер тапшырыуҙа ла әсенеп-әсенеп: "Их, бөгөн сәхнәгә мендерерлек геройҙар ҡалманы бит", - тип һөйләгәйне бер халыҡ артисы ла. Уйландырҙы был фекер. Һәм беҙ ул фекергә альтернатива эҙләргә булдыҡ. Ысынлап та, бармы беҙҙә бөгөн балалар, йәштәр алдына өлгө итеп ҡуйырлыҡ, уларҙы дәртләндерерлек, һоҡландырырлыҡ ҡаһармандар, батырҙар, геройҙар, шәхестәр? Йырҙарыбыҙ, романдарыбыҙ, сәхнә әҫәрҙәребеҙ кемгә арналырға тейеш бөгөн? Әйтәйек, ошо биттә баҫылған монолог авторы Ирек Зарипов шундай өлгө була алмаймы ни? Була ала, әлбиттә! Батырлыҡ, фиҙаҡәрлек, оптимислыҡ, юғары рух, таһыллыҡ, көс, илһөйәрлек өлгөһө ул дабаһа!**
**Әйҙәгеҙ, уйлашайыҡ әле бергәләп: кемдәр герой тип атала ала бөгөн? Ошо яңы рубрикаға һеҙҙең материалдарҙы, тәҡдимдәрҙе көтәбеҙ. Ә түбәндәге мәҡәләлә шулай уҡ бөгөнгө көн геройы булырҙай милләттәшебеҙ хаҡында уҡырһығыҙ. Уның тураһында беҙ бер тапҡыр яҙып та сыҡҡайныҡ инде. Был юлы - ҡыҫҡаса ғына бер нисә һүҙ.**

Кеше, ғәҙәттә, яңы мөхиткә эләгеүе була, әйләнә-тирәләгеләргә яраҡлашырға тырыша, улар кеүек кейенә, һөйләшә, ҡылана башлай. Был үҙенсәлек балаларҙа айырыуса асыҡ күренә. Шул уҡ ваҡытта кешелә бер ниндәй мөхит тә, шарттар ҙа үҙгәртә алмай торған холоҡ һыҙаттары ла осрай. Мәҫәлән, илһөйәрлек, телһөйәрлек, икенсе төрлө әйткәндә, патриотлыҡ тойғоһо. Был тойғо көслө икән, тимәк, бер ниндәй ҙә мөхит уларҙы юя, хатта үҙгәртә лә алмай.

Әлеге көндә Лос Анджелес ҡалаһында йәшәгән милләттәшебеҙ - быға асыҡ миҫал. Ул - профессиональ бокс оҫтаһы. Уны һәр ярыш алдынан "Crazy Russian", тип иғлан итәләр. Был беҙҙеңсә "аҡылдан шашҡан рәсәйле" тигәнде аңлата. Шулай ҙа, инглиз телендә биргән бер интервьюһынан күренеүенсә, Хәбир Сөләймәнов үҙенең урыҫ түгеллеген һәр ерҙә ҡабатлай. Был егет Америкаға турист сүрәтендә лә, студент булып та бармаған - ул Американы яулар өсөн барған.

1980 йылдың 17 декабрендә Силәбе өлкәһе Арғаяш районы Илембәт ауылында - донъяның иң көслө кешеһе Эльбрус Ниғмәтуллинды биргән ауылда тыуған Хәбир Сөләймәнов. Үҙенә ике һыу тамсыһылай оҡшаған Сабир исемле игеҙәк ҡустыһы ла бар. Әйткәндәй, улар икеһе лә бокс буйынса Нью-Йорк чемпиондары. Игеҙәктәр тураһында былтыр гәзитебеҙҙә яҙғайныҡ инде. Күрше Дәрүиш ауылына урта мәкәпкә йөрөп уҡыйҙар. Үҙҙәре бик хәрәкәтсән булып үҫә. 17 йәшлек саҡтарында билдәле спортсы, кикбоксинг буйынса Рәсәй һәм Европа чемпионы Салауат Байрамғәлин ҡулында тәрбиәләнә башлайҙар. Урта мәктәпте тамамлау менән игеҙәктәр Силәбе ҡалаһының Аграр-инженер университетына уҡырға инә. Күп тә үтмәй, Салауат Байрамғәлиндың кикбоксинг мәктәбе лә Силәбегә күсә. Студент йылдарында ла был спорт төрө менән шөғөлләнеүҙәрен дауам итә егеттәр. Тәүҙә ҡалала, тиҙҙән - өлкәлә, ә артабан Рәсәйҙә лә еңеп сығалар.

Ил беренселегә өсөн ярыштарҙың береһендә Рәсәйҙән Америкаға күсеп киткән бер тренер егеттәргә кикбоксингты ҡалдырып, үҙенең мәктәбендә бокс менән шөғөлләнергә тәҡдим итә. "Сөнки АҠШ-та бокс киң таралған", - ти ул. Был һөйләшеү уларҙың алдағы тормошонда хәл иткес роль уйнай. "Эмигрант"тың тәҡдименә егеттәр риза була. Шулай итеп, ҡулдарына диплом алған Хәбир менән Сабир Америкаға оса. АҠШ-тың Нью-Йорк ҡалаһында егеттәр сәмләнеп эш башлай. Канзас ҡалаһында һәүәҫкәр боксерҙар араһында үткәрелгән "Алтын "бирсәткә" исемле ярышта 2005 йылда Сабир 54 кг-ға тиклемгеләр араһында беренсе, ә Хәбир 57 кг-ға тиклемгеләр араһында икенсе урындарҙы яулай. Был еңеү уларҙы артабан эшләргә ҡанатландыра. Бер йыл үткәс, Хәбирҙең ауырлығын "ташлаталар", һәм игеҙәге Сабир менән бер рингҡа сығаралар. Ошо йылдың декабрендә "Алтын бирсәткәне" "үҙ ҡулдарына кейә" Сөләймәновтар, йәғни чемпион исемен яулайҙар. Күптән түгел Хәбир Сөләймәнов Бөтә донъя бокс берлегенең алтын билбауын яуланы.


Хәбир Сөләймәнов.

Артабан Глендейл (АҠШ Калифония) ҡалаһында уҙғарылған Бөтә донъя бокс берекмәһенең WBO NABO вакант титулына лайыҡ булды. Ул Хавьер Галло исемле мексиканлыны 9-сы раундта нокаутҡа "ебәрҙе".

Бөгөн һүҙебеҙ - Хәбирҙең батырлыҡҡа тиң бер үҙенсәлекле холҡо тураһында. Ул донъяның ҡайһы мөйөшөндә, ниндәй генә аудитория алдында сығыш яһамаһын, кемгә генә ҡаршы һуғышмаһын - американлығамы, мексиканлығамы - бокс башланыр алдынан башҡорт милли кейеме елән һәм ҡамсат бүрек кейеп алып, рингты бер-ике тапҡыр урап сыға. Уны бөтә донъяла тап башҡорт милли кейемендә таныйҙар. Башҡорт милли кейеме - Хәбир Сөләймәновтың визит карточкаһы. Бөгөн арабыҙҙа ошо милләттәшебеҙ кеүек илһөйәрҙәр күпме? Был һорауға һәр уҡыусының үҙенең яуабы булыр, моғайын. Шулай ҙа, Хәбир Сөләймәнов бар һәм беҙ уның менән ғорурланабыҙ, уны ҙур ҡәнәғәтләнеү менән "Беҙҙең заман геройы" тип атайбыҙ. Һәр хәлдә, ул беҙҙең йәштәребеҙ өсөн көс һәм илһөйәрлек өлгөһө була ала.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Иленән, халҡынан әллә нисәмә саҡрымдарға алыҫта йөрөһә лә, һәр саҡ иле, халҡы менән бергә ҡала Хәбир. Һин кем генә булһаң да, ҡайҙа ғына йөрөһәң дә халҡыңдың бер вәкиле булыуыңды онотмаҫҡа тейешһең, тигән фекерҙә ул. Хәбир Сөләймәнов - донъяның иң көслө ун спортсыһы исемлегенә ингән, әммә уны башҡа спортсыларҙан айырып торған үҙенсәлеге - башҡортлоғо менән ғорурланыуы, башҡортлоғон алға ҡуйыуы. Үҙ илеңдә лә башҡорт булыуы бик еңелдән түгел, ә һин Америкала башҡорт булып ҡара!**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

**✓ Бына һин - бәхетле кеше, Сабирйән. Ваҡытында һөйөп, Сәбиләне алдың да, йән һөйгәнең менән ҡайғы белмәй йәшәй бирәһең. Ә миңә Хоҙай ниндәй гонаһтарым өсөн бындай ҡайғыны биргән? Мин әле бер ҡыҙҙы ла яратып өлгөрмәнем...**





Хәлил Һөйөндөков

# Шәүрә

(Ҡисса)

*Шәүрә килен кейгән, ай, еләндең*
*Итәк осҡайҙары мунсаҡлы.*
*Айға ла ғына, көнгә тиңләмәйем,*
*Һылыулығың, Шәүрәкәй, шул саҡлы.*
***Халыҡ йырынан.***

Май айының ахырында ғәҙәттән тыш эҫе көндәр башланды. Ҡояш йәй уртаһындағы һымаҡ ҡыҙҙыра. Төшкә ҡарай төшкән эҫегә хатта ҡоштар ҙа һайрауынан тынып ҡала. Тик сиңерткәләрҙең генә ҡыр яңғыратып бер туҡтауһыҙ сырылдашҡаны ишетелә. Ғәлләм байҙың көтөүсеһе Сабир һарыҡтарын бер урынға өйөрҙө лә, көнгә янып ҡарағусҡыл төҫкә ингән маңлайынан, сикәләренән тәкәтһеҙ аҡҡан тирҙәрен түбәтәйе менән һөртә-һөртә, ҡайын төбөнә күләгәгә килеп ултырҙы. Бындай эҫе көндә, һарыҡтар бер-береһенең араһына баштарын йәшереп, бер урында өйкөлөшөп тора бирә. Эҫелә уларҙың ашау ҡайғыһы юҡ. Ана шул ваҡытты файҙаланып, көтөүсегә бер аҙ тамаҡ ялғап алырға ла була. Башына килгән икһеҙ-сикһеҙ уйҙарын иреккә сығарып ебәреп, ашыҡмай ғына, теләгәненсә фекерләп алырға ла һис берәү ҡамасауламай. Ер ҡыҙыуына тулҡынланып күренеп, тиҫтәләгән саҡрымдарҙа ятҡан алыҫ офоҡҡа ҡараған килеш уйға батты Сабир.

Эйе, егерме дүрт йәшенә етеп, был донъяла уның бер ҡасан да рәхәтлек күреп йәшәгән мәле булманы. Бәлки, ана шул икһеҙ-сикһеҙ офоҡ арьяғындағы ерҙәрҙә йәшәгән кешеләрҙең көнкүреше бөтөнләй башҡалыр, бар кешеләр ҙә уның хужалары кеүек бәхетле, бай тормош һөрәләр. Үҙ ғүмерендә хатта бынан ун биш саҡрымда ятҡан Байыҡ ауылына ла барыу бәхетенә өлгәшә алғаны юҡ әле уның. Шуға күрә лә алыҫта күренеп ятҡан офоҡ һыҙығы ерҙең сиге һымаҡ тойола уға. Башҡа ерҙәрҙә лә барып күргәһе килә уның. Хатта батша әрмеһенә барып, ер-һыу күреп килергә лә риза ул. Тик ниндәйҙер сәбәп менән уны саҡыртыусы кеше булманы. Берҙән-бер йыуанысы - ҡатыны Сәбилә һәм ике йәшлек улы Мөхәммәт.

Күптән түгел донъя ҡуйған Ғәлләм байҙың аласығында улар өсәүләп йәшәй. Байҙың тол ҡалған ҡатыны Мөслимәгә ялсы булып хеҙмәт итә улар. Йәй утын-бесән әҙерләүсе лә, йөҙәрләгән баш һарыҡтарын көтөүсе лә шул Сабир. Сәбилә байҙарҙың керен йыуа, уларға ашарға бешерә. Байҙарҙың, тигәс тә, бәхеткә күрә, хужаларҙың ғаиләләре әллә ни ишле лә түгел. Мөслимә байбисә үҙенең алты мөйөшлө өйөндә берҙән-бер улы менән йәшәй. Шул уҡ ихаталағы икенсе өйҙә Ғәлләм байҙың ҡустыһы Ғарифйән ҡартайған ата-әсәһе менән донъя көтә.

Мөслимәнең ун ике йәшлек улы Кәлимулла бәләкәйҙән аҡылға самалыраҡ булып үҫеп килә. Унайы тура килгәндә берәй боҙоҡлоҡ эшләргә әҙер генә тора Кәлимулла. Үткән аҙнала Сабирҙар йәшәгән аласыҡ янында усаҡ яғып, янғын сығарып ебәрә яҙҙы. Ярай әле, Сәбилә ваҡытында күреп ҡалып, һүндереп өлгөргән. Был турала байбисәгә әйткәс, тегеһе үҙенең улын тыйыу урынына:

- Бала кеше ни, уйнай инде. Ҡулын бәйләп ултыртып булмай бит инде уның, - тип һөйләнеп алды ла китте.

Үҙенә йылдар буйы хеҙмәт итеп, барлыҡ эштәрен башҡарып йөрөгән ялсыларына Мөслимәнән йылы һүҙ бик һирәк эләгә. Бөтә хужалыҡ эше үҙ иңендә булған өсөн дә ана шулай үҙен хужаларса тоталыр инде байбисә. Уны ҡасандыр бер бик ярлы ғына кешенең ҡыҙы булған тип һөйләйҙәр. Ғәлләм бай уны ҡатын итеп алғанда бирнәгә бер юрғаны ла булмаған, имеш. Төҫкә-башҡа бик сибәр булғаны өсөн, Ғәлләм бай уны "кеше" итеп алған, имеш. Кәләш итеп алғас, тәүге бер нисә йыл башҡалар күҙенән ҡыҫғанып, хәләл ефете йыш ҡына уның артынан күҙәтеп, хатта һыуға барғанында ла уны "оҙатып" йөрөр булған. Ана шул һылыулығы арҡаһында, әллә Ғәлләмдең ҡыҙғансыҡлығы сәбәбенән, Мөслимәнең һырт буйына ҡамсы ла тама торған булған. Йылдар үтеү менән һылыу Мөслимә байбисә Мөслимәгә әйләнгән.

Уйының ошо еренә килеп еткәс, Сабир байбисәне күңеленән йәлләп ҡуйҙы. Байбисәнең дә артыҡ бәхете юҡ икән шул. Ғәзиз балаңдың сирле булыуынан да ҙурыраҡ бәхетһеҙлек бармы һуң...

Ғәлләм мәрхүмдең бер туған ҡустыһы Ғарифйән, Сабир менән бер йәштә булыуға ҡарамаҫтан, һаман да булһа буйҙаҡ. Төҫкә-һынға матур, башҡалар менән бик яғымлы, кешеләрсә һөйләшә. Ялсыларға екеренеп һүгенгәнен бер ҡасан да ишетмәҫһең. Бик моңло итеп йырлай ҙа белә Ғариф, матур итеп ҡурайҙа ла уйнай. Ошо бай ғаиләһенән тик уны ғына ысын күңелдән ихтирам итә Сабир, хатта үҙенең дуҫы итеп һанай. Ғариф Сабир менән, ысынлап та, дуҫтарса мөнәсәбәттә. Үҙен борсоған берәй эс сере булһа ла Сабир менән бүлешергә әҙер. Байбисә еңгәһенең ҡырыҫлығын Ғариф та яратып етмәй. Ғарифтың иң яратҡан шөғөлө - аттар менән булышыу. Көндәр буйы шулар янында урала. Уларҙы ашата, йылға буйына алып барып йыуындыра, ялдарын тарай, менгегә һәм еккегә өйрәтә. Өйҙәге барса эштәр менән Мөслимә еңгәһе етәкселек иткәнгә күрә, хужалыҡ эштәренә ҡыҫылып бармай. Ғарифтың аттар менән "дуҫлығы" Сабир өсөн бик тә ҡулайлы. Сөнки байҙарҙың йөҙләгән баш йылҡыһын да Сабирға ҡарарға тура килер ине. Сабиргә йәйәү йөрөү ауыр булыр тип, Ғариф дуҫы көтөүҙән иң йыуаш атты һайлап алып бирҙе.

Сабир осон осҡа ялғай алмаған уйҙарының тап ошо урынына килеп еткәндә, Сәбиләһе төшкә ашарға алып килде.

- Бынау байҙарҙы уйлап ултырам әле, әсәһе, - тип һүҙ башланы Сабир. - Һис тә ыҙа күрмәйенсә генә ғүмер һөрәләр был яҡты донъяла. Әйтерһең дә был донъя - уларҙың ожмах урыны... Беҙҙең кеүек көн-төн эш менән ыҙа күрмәйҙәр, туйғансы ашайҙар, үҙҙәре теләгәненсә ял итәләр.

- Әйтмә инде, атаһы, - тине иренең һүҙҙәрен һәр саҡ хуплап өйрәнгән Сәбилә алып килгән төйөнсөгөн сиҫә-сиҫә, - уларҙы Аллаһы Тәғәлә шуның өсөн дә бай итеп яратҡандыр. Хәйер, байҙарҙың да үҙҙәренә күрә ҡайғылары була торғандыр. Әле Ғәшүрә еңгә һөйләп ултырҙы, имеш, Ғариф байға Мөслимә еңгәһен ҡатын итеп алырға димләйҙәр икән. Ә Ғариф, бынамын тигән, типһә тимер өҙәрҙәй йәш егет, быға бер ҙә риза түгел, ти. Бәй, тиктомалға риза булырға ни, үҙеңдән егерме йәшкә олораҡ булған еңгәңде кәләш итеп алып бирһендәр әле. Ғарифтың әле ҡыҙ һөйөп кенә йөрөр сағы бит. Атаһы Сәмиғулла ҡарт: "Ата-бабанан ҡалған йоланы боҙорға юл ҡуймам", - тип әйтә, ти. Йәнәһе, киленен ситкә тибәрәһе килмәй. Шулай булһа - булыр, усал ҡарт бит. Бөтә донъяны үҙ ҡулында тотоп өйрәнгән. Инде үҙе лә ир ҡорона еткән малайы һаман да булһа атаһының ҡурайына бейей...

Ысынлап та, йорттағы бар хужалыҡты күптән инде килене тартыуына ҡарамаҫтан, инде ныҡ ҡартайып, бөлтерәп бөткән Сәмиғулла ҡарт һаман да әллә ҡасан уҡ үҫеп, балиғ булып бөткән бала-сағаларының бөтә тормошон нисек теләй, шулай алып барырға тырыша. Атаһының үтә тиҫкәре холҡына күнегеп тә бөткән инде Ғариф. Шулай ҙа үҙе атай булыр йәшкә еткән егет, атаһына һуҡыр рәүештә буйһоноп йәшәүенә ҡайһы саҡ ғәрләнеп тә ҡуйғылай, ахры. Ялсылары алдында атаһы улына берәй бойороҡ бирһә, әле генә йылмайып, ирәбе йөрөгән Ғарифтың йөҙө кинәт кенә ҡара янып киткәне зирәк Сабирҙың иғтибарынан ситтә ҡалмай.

Көндәрҙән бер көндө, кискә ҡарай, һарыҡтар йәйләүенә Ғариф үҙе килеп етте. Уның менгән туры айғыры, үтә шәп сабып килгәнгә күрә, ап-аҡ тир күбегенә батҡан, танауҙарын киң итеп йыш-йыш тын ала ине. Ғариф йылға буйындағы туғайлыҡҡа көтөүен таратып ебәреп, атының ауыҙлығын ысҡындырып, ашатып йөрөгән Сабир янына килеп еткәс, атынан һикереп төштө лә уның йүгәненән яҡындағы ҡайынға бәйләп ҡуйҙы. Күҙҙәре менән алан-йолан ҡаранып, башын һаман йылға яғына борорға маташҡан айғырының сикәһенән һөйҙө:

- Ярамай, ярамай, әлегә, Турыҡай, һыу эсһәң, "эҫеләй" булырһың, - тип кешеләргә өндәшкән һымаҡ һөйләнде.

- Нишләп шул хәтлем ҡыуғанһың атыңды, ҡорҙаш, - тип һораны Сабир манма тиргә батҡан туры айғырға күрһәтеп. - Әллә ауылдан берәй ҡурҡыныс хәбәр алып килдеңме?

- Хәлдәр мөшкөл әле, ҡорҙаш, - тине Ғариф һәм йомшаҡ үләнгә салҡанан һуҙылып төшөп ятты.

- Ни булған, әллә сирләп киттеңме? - тигән булды Сабир дуҫының ни әйтергә теләгәнен һиҙемләп.

- Сир генә булһа икән ул, Сабир дуҫ, - тине Ғариф ауыр һулап. - Тән ауырыуы ғына еңел була икән шул. Ә бына күңел яралары иң ҡаты сирҙәрҙән дә ауыраҡ икәнен күптән түгел генә аңланым.

- Йә нимә булды һуң, ҡорҙаш, асыҡ итеп һөйлә әле, - тине Сабир.

- Үҙең дә ишетә белгәнһеңдер инде: атай ҡарт мине өйләндерергә итә. Әлбиттә, ауылдағы иң сибәр ҡыҙға түгел, ә үҙемдең бер туған ағайым мәрхүмдең ҡатынына - Мөслимә еңгәмә. Ярты еңгәй - ҡәйнештеке, имеш, борондан килгән йола имеш... Әле ҡыҙҙар күҙләп кенә йөрөр сағында ҡарт еңгә ҡуйынына инеп ятсы... Фәрләнәм мин, дуҫҡай, бик фәрләнәм, аңлайһыңмы, - Ғарифтың күҙҙәре йәшләнде. Күҙ йәшен дуҫы күрмәһен өсөн башын икенсе яҡҡа бора биреп, күҙҙәрен алыҫҡа төбәп, йөрәктәргә үтеп инерлек моңло тауышы менән үтә лә һағышлы итеп әкрен генә йырлап ебәрҙе:

*Иртә лә генә тороп тышҡа сыҡһам,*
*Көйөлдө ҡош оса һыҙғырып.*
*Сәсбауҙарын һалып, биштән үреп*
*Үҙ еңгәйем килә ҡыҙ булып.*

Эйе, дуҫҡай, үҙ еңгәйем килә ҡыҙ булып. - Йырының һуңғы юлын тағы бер мәртәбә ҡабатлап ҡуйҙы. - Бына һин - бәхетле кеше, Сабирйән. Ваҡытында һөйөп, үҙ тиңдәшең - Сәбиләне алдың да, йән һөйгәнең менән ҡайғы белмәй йәшәй бирәһең. Үҙ балағыҙҙы үҫтерәһегеҙ. Ә миңә Хоҙай ниндәй гонаһтарым өсөн бындай ҡайғыны биргән икән? Мин бит әле бер ҡыҙҙы ла яратып өлгөрмәнем...

Ара-тирә иң яҡты йондоҙҙары ғына күренгеләй башлаған аяҙ күккә ҡарап, егет өнһөҙ ҡалды.

- Көймә әле, дуҫҡай, бәлки, атайыңды күндереп тә булыр. Һиңә бынамын тигән ҡыҙ ҙа димләрбеҙ, - тип йыуатырға тырышты уны Сабир.

- Юҡ инде, ҡорҙаш, һин атайымды белмәйһең. Ул ҡараны аҡ тиһә лә һәр ваҡыт уныңса була. Әгәр берәй эш ҡылырға ниәтләй икән, шуны тормошҡа ашырмайынса, бер ҡасан да туҡтамай торған кеше. Уныҡы - закун. Хатта никах уҡытырға киләһе йомаға Әхмәҙулла мулланы саҡырып ҡуйырға ла уйлай.

- Ә Мөслимә еңгәң ни ти һуң?

- Минең ризалығымды ла һорамағас, уның уйын кем һорап торһон инде. Хәйер, уға тол ҡатын булыуға ҡарағанда, ҡәйнеш ҡуйынына инеү, бәлки, яҡшыраҡтыр...

Бер аҙ уйланып ултыра биргәс, ауыҙына ҡапҡан бәпембә үләненең һабағын сәйнәй-сәйнәй, һүҙен дауам итте Ғариф:

- Хужалыҡты нисек алып барырға белмәйем һәм әлегә әллә ни белергә лә теләгем юҡ. Еңгә үҙе бынамын тигән хужабикә, ирҙәрҙән кәм түгел. Үҙең аңлап тораһың, ҡорҙаш, ҡырҡҡа еткән еңгә менән тормош башлап ебәргe килмәй. Ә атай һүҙен кире ҡағыу килешмәгән һымаҡ тағы ла... Һикһәнгә аяҡ баҫҡан ҡарттың күңелен ҡыйырға баҙнатым да етмәй.

- Бына ошо уйҙарыңды атайыңа әйтеп ҡараныңмы һуң?

- Әйтмәгән генә ҡайҙа инде ул, дуҫҡай, әйттем. Әммә ул: "Үҙем ун йәшемдән еңгә ҡуйынына керҙем, үлмәгәнмен әле...", - тип, үҙенең һүҙенән бер аҙым да кире сигергә уйламай.

Улар ҡараңғы төшкәнсе һөйләшеп ултырҙы. Күктәге ынйылай йымылдашҡан һанһыҙ йондоҙҙарға ҡарап, Ғариф:

- Белһәң ине, Сабир, ошо Ер йөҙөнән башҡа тағы ла шундай берәй ер бармы икән. Әгәр булһа, унда ла шулай уҡ кешеләр йәшәйҙер инде... Ундағы һәр кешенең дә бәхете икенсе кешеләрҙән торамы икән? Ошо яҡты донъяла һәр кешенең үҙ бәхетен үҙе хәл итергә хоҡуғы булһа ине. Һәр төрлө йола, ғөрөф-ғәҙәттәрҙең әҙәм балаларын бәхеттән мәхрүм итә торғандары бөтөнләйгә булмаһа ине, - тип һөйләнде.

- Шулай шул, Ғарифйән ҡорҙаш. Был донъялағы ғөрөф-ғәҙәттәрҙе беҙ уйлап сығармағанбыҙ, борондан, ата-бабаларыбыҙҙан килә бит улар. Ә беҙгә тик шуларға буйһоноп ҡына йәшәргә ҡала.

- Сабирйән дуҫ, кәңәш ит әле, бәлки, миңә берәй баш һуҡҡан яҡҡа сығып китергәлер, ә?

- Аңлайым, ҡорҙаш, күңелеңдең нисек әрнеүен. Тик үҙ яҙмышыңдан уҙып бер ҡайҙа ла китеп булмайҙыр шул.

Ғариф, урынынан тороп, атына һикереп менде лә:

- Ярай, дуҫҡай, ҡайғырып, баш менән таш ватып булмай бит, ни хәл итәһең инде, - тине. - Ә-ә-әй, онотоп торам, Мөслимә еңгәм әйтергә ҡушҡайны: ҡурше Мәмбәтҡол байҙың һарыҡтарына бүре тейгән, ти. Шуға эт-ҡоштан һаҡ булырға ҡушты.

Килгәндәге кеүек йән фарман саптырып, Ғариф төн ҡараңғылығына инеп юғалды.

* * *

Сәмиғулла ҡарт үҙ һүҙен һүҙ итмәй ҡалмай шул. Ҡарсығы Мәҙинә әбей: "Мөслимә килен өсөн Ғарифйән бик тә йәш бит, атаһы. Уға үҙенең тиңен - йәшерәк берәй ҡыҙҙы эпирһәк, яҡшыраҡ булмаҫмы? Бигерәк тә йәл шул бала", - тип әйтеп ҡараһа ла, ҡарт уның һүҙҙәрен бар тип тә белмәне.

- Һин бер нәмә лә аңламайһың, әбей, - тип һикелә ҡырын ятҡан килеш, ғәҙәтенсә, ике ҡулын һелтәй-һелтәй, төкөрөк-

тәрен сәсә-сәсә һөйләнде Сәмиғулла бабай. - Хәҙер Ғарифйәнгә Мөслимә киленде әпирһәк, Ғәлләмитдин мәрхүмдең мал-тыуары әрәм булмай. Тағы ла үҙенә тейеш малы ҡушылһа, Ғарифйәнең серегән бай булып китәсәк. Ана шуны уйлайым да мин, әсәһе. Уға ҡалһа, Мөслимә килен бер ҙә ҡарт түгел. Ҡырҡ йәштә кеше ҡарт була тиме ни. Үҙең белеп тораһың, мин бит еңгәй ҡуйынына ун йәшемдән индем - үлмәнем. Тик бына еңгәм генә бик иртә, етмештең бишендә генә донъялыҡтан китеп барҙы, бахырың. Ярай әле уның өҫтөнә һине алғанмын. Юғиһә, анау Ғабделмән һымаҡ әбей эҙләп ҡаңғырыр инем...

Мәҙинә ун һигеҙенсе генә йәшендә Сәмиғуллаға икенсе ҡатынлыҡҡа килде. Йәш ғүмеренең нисек итеп үтеп киткәнен һиҙмәй ҙә ҡалды. Уның берҙән-бер йыуанысы - Ғарифйәне булды. Сөнки уға тиклемге балалары тыуғас та үлә торҙолар. Ғәлләмитдин - Сәмиғулла ҡарттың тәүге ҡатынынан тыуған улы ине.

Бала сағынан бик теремек, һөйкөмлө, аҡыллы ғына булып үҫте Ғарифйәне. Ата-әсә һүҙен бер ҡасан да йыҡманы. Бәләкәйҙән тәбиғәткә, йырмоңға ғашиҡ ине ул бала. Башҡа бала-сағаларҙан айырмалы рәүештә, уйланып-хыялланып, ҡарашын алыҫтарға төбәп, сәғәттәр буйы бер һүҙһеҙ ултыра ине ул ҡайһы саҡтарҙа. "Эй, балам, ҡыҙҙар кеүек бигерәк моңло, бигерәк наҙлыһың шул. Хоҙай бәхетеңде генә насип итһен инде", тип теләктәр теләй ине Мәҙинә улына. Ғарифйәне егет булып үҫеп еткәс тә, йәш килен һөйөргә хыялланып йөрөй ине Мәҙинә әбей. "Ҡалайыраҡ килен яҙған икән балама", тип уйлай ине ул. Баҡһаң, атаһы уға килен әҙерләп тә ҡуйған. Йә Ғәлләмитдине йәшәй бирмәне, бахырың, илле менән алтмыш араһында ғына эс ауырыуынан донъя ҡуйып ҡуйҙы...

- Ярар, атаһы, Ғарифйәндең өлөшөнә тейгән көмөшө шулдыр инде, ни хәл итәһең, - тип ҡуйҙы Мәҙинә әбей ахырҙа яулыҡ осо менән сыланған күҙҙәрен һөртә-һөртә.

Сәмиғулла ҡарт бер эште лә оҙаҡҡа һуҙырға яратмай. Тимерҙе ҡыҙыуында һуғырға ғәҙәтләнгән. Иртә менән тороп, күптән түгел ҡырҙа ҙур уҡыуҙы тамамлап ҡайтҡан йәш мулла Әхмәҙуллаға китте. Ул ингәндә мулла урындыҡта ниндәйҙер китап уҡыу менән мәшғүл ине.

- Әссәләмәғәләйкүм! - тип сәләм бирҙе ҡарт инеү менән.

- Вәғәләйкүмәссәләм, - тип яуапланы Әхмәҙулла мулла китабынан айырылып. - Ә-ә-ә, Сәмиғулла олатай килгән икән. Әйҙә, олатай, уҙып ултыр. - Мулла бик еңел хәрәкәт менән урындыҡтан төшөп, Сәмиғулла бабай менән ҡуш ҡуллап күреште.

Урындыҡ ситенә ултырып, көрәк һаҡалын һыйпап доға ҡылғандан һуң, кескәй өйҙө уртаға бүлеп торған ҡорған артында йәш бала менән мәшғүл булған абыстайына өндәште:

- Өйгә ҡунаҡ килде, әсәһе, ҡана, сәй ҡуйып ебәр.

- Сәй эсеп тормайым инде мин, кем, Әхмәҙулла улым. Һиңә бер йомош менән генә килгәйнем, - тине ғүмер баҡый ҡабаланырға ғәҙәтләнгән ҡарт.

- Әйҙә, олатай, улай булғас, һөйләп бир йомошоңдо, - мулла ҡартҡа түрҙән урын күрһәтте. - Оло башыңды кесе итеп, минең йортҡа тәү тапҡыр килеп ултыраһың, түргә уҙ, олатай.

Сәмиғулла ҡарт быуындарын шытырҙата-шытырҙата йөгөнөкләп барып түргә менеп, аяҡтарын бөкләп ултырып алды.

- Кем, Әхмәҙулла улым, үҙем именһау саҡта бер изге эште атҡарып ҡуяһы ине бит әле.

- Сөбхәналлаһ, сөбхәналлаһ, олатай, изге ниәттәр менән йөрөйһөң икән, бик мәслихәт, - мулла ҡартты тыңларға әҙерләнде.

- Улым, минең төпсөгөм - Ғарифйәнем егерме дүрт йәшкә ҡараһа ла һаман буйҙаҡ йөрөй икәне үҙеңә лә мәғлүм бит инде. Ана шул улымды башлы-күҙле итеп, никахлап ҡуяһы ине.

- Бәрәкаллаһ, бәрәкаллаһ. Ниәтең бик яҡшы, олатай. Кемдең ҡыҙын һоратмаҡсы була Ғариф бай?

- Кемдең тип ни, кем, Әхмәҙулла улым, ана теге ни бит әле... - Сәмиғулла ҡарт һирәк һаҡалын һыйпап алды. - Үҙең белеп тораһың, беҙҙең Мөслимә килен тол ҡалғанына әллә нисә ай үтеп китте бит. Ана шул еңгәһен ҡатынлыҡҡа алып бирергә ине Ғарифйәнгә.

Әхмәҙулла мулланың йөҙөнә ғәжәпләнеү билдәһе сыҡты:

- Мөслимә еңгәнеме?

- Эйе, эйе. Башҡа кемде булһын ти... Әле йәш, түлдән ҡалмаған. Һылыу. Ҡалаҡҡа һалып ҡына йот та ҡуй инде...

- Һе, ҡалаҡҡа һалып, тиһең инде. Уларҙың йәш айырмаһы ла байтаҡ ҡына бит әле, Сәмиғулла олатай. Мөслимә еңгә, әлбиттә, һылыу - һүҙ юҡ. Тик һинең күҙлектән сығып ҡарағанда ғына ул бик йәш... Ә егерме дүрте лә тулмаған Ғарифйәндең ни уйлағанын һорашып ҡараманыңмы, олатай? - Мулла ҡартҡа һораулы баҡты.

- Ғариф үҙе риза түгел түгеллеккә, шайтан малай. Әммә кем унан һорарға йыйына әле?.. Мин үҙем ун бер йәштә еңгә ҡуйынына...

- Туҡта әле, Сәмиғулла олатай, - Әхмәҙулла мулла уны бүлдерҙе. - Ә бына мин унан һорарға йыйынам никах уҡыр алдынан. Шәриғәт хөкөмө буйынса, ир кеше риза булмаһа, көсләп уҡылған никах дөрөҫ булмай. Ир кешенең генә түгел, ҡатын кешенең дә никахҡа ризалығын таный шариғәт... Китап тап ана шулай ҡуша.

Сәмиғулла ҡарттың йөҙөндә асыу билдәләре күренде.

- Әле һин дә мулла исемен тағып йөрөгән кеше булып, шул маңҡаны яҡлашып ултыраһың инде, кем, Әхмәҙулла ҡусты. Һин әллә ҡайҙарҙа уҡып ҡайтҡан кеше булһаң да мин был донъяла һиңә ҡарағанда күберәк йәшәгән кеше. Ата-бабаларыбыҙҙың йолаларын бик яҡшы беләм. Борон-борондан шулай килгән йола: ағаһы үлһә, тол ҡалған ҡатыны ҡәйнешенә бара торған...

- Былдай йоланы мин дә ишеткәнем бар, олатай. Үкенескә ҡаршы, аҙым һайын осрай. Әммә Бәйғәмбәребеҙ саллаллаһу ғәләйһиссәләм хәҙистәренең береһендә никахҡа ирҙең ризалығы мотлаҡ булыуын әйтеп ҡалдырған... Шуның өсөн дә, Ғариф ҡустының ризалығын алмайынса никах уҡып, Аллаһ алдында гонаһлы булғым килмәй.

Сәмиғулла ҡарт һөйләнә-һөйләнә өйҙән сығыу яғына ыңғайланы.

- Уҡымаһаң, һиңә башҡаса ялынып торорға йыйынмайым, кем, Әхмәҙулла улым. Никах уҡырҙай мулла табырмын, Алла бирһә. Әле тик үҙеңә хөрмәт йөҙөнән генә килгәйнем. Ата-баба йолаһын таныған муллалар бөтмәгәндер әле...

* * *

Никахты Хәлфитдин мулла уҡыны. Уҡыр алдынан Ғариф менән Мөслимәнең никахына ризалыҡ тик Сәмиғулла ҡарттың үҙенән генә алынды. Бына шулай итеп шәриғәт ҡағиҙәһен үҙенсә ҡулайлаштырып, бер аҙ борғолап, йәштәрҙең киләсәген үҙҙәренсә хәл итеп тә ҡуйҙылар. Никах уҡылып, ир-ҡатын иғлан ителгәндән һуң, Хәлфитдин мулла тейешенсә хәйер-саҙаҡаһын алып, өйөнә ҡайтып китте. Сәмиғулла ҡарт менән Мәҙинә ҡарсыҡ улына һәм килененә бәхет, оҙон ғүмер теләне. Ғариф бик төшөнкө кәйеф менән ағаһы мәрхүмдең өйөнә инде.

Бер аҙ йәшәреп тә алған һымаҡ тойолған Мөслимә йәш ире алдында өлтөрәп кенә йөрөргә тырышты.

- Ҡана, аяғыңды йыуҙырайым, атаһы, - тип ул йоҡлар алдынан йылы һыу һалынған ҡомған менән еҙ тас килтерҙе.

- Ярар, еңгә, юҡҡа мәшәҡәтләнмә, үҙем дә йыуа алам бит, - тип Ғариф ҡаршылашырға маташты.

- Нишләп мин һиңә хәҙер еңгә булайым, һинең хәләл ефетең, - тип йылмайҙы һаман да йөҙөнөң һылыулығын ташламаған Мөслимә. Әммә еңгәһе ниндәй генә сибәр йөҙлө булмаһын, йәш Ғарифҡа уның йылмайыуы тешен ыржайтып уны әләкләгән һымаҡ булып тойолдо. Ғәлләмитдин ағаһын бигерәк тә ярата һәм хөрмәт итә ине шул Ғариф. Был никахты ул мәрхүм ағаһының рухына хыянат кеүек ҡабул итте. Шунлыҡтан булһа кәрәк, еңгәһенә нисек яҡын барырын күҙ алдына ла килтерә алманы.

- Минең йоҡом килә, еңгә. Бигерәк арып кителгән, - тине лә, йомшаҡ итеп йәйелгән күпмә өҫтөндә мөйөшкә ҡарай әйләнеп ятты.

- Бәй, йәш кешенең йоҡоһо киләлер шул... Әле иртә бит йоҡларға. Әҙерәк һөйләшеп ятайыҡ һуң, - тине тәүге никах төнөнә әҙерләнеп, йоҡа эске күлдәк менән генә ҡалған Мөслимә. Ғарифтың арҡаһына йомшаҡ ҡына ҡағылды.

- Нәмә һөйләшәһең инде, - тине тәнен зымбырлатырлыҡ был ҡағылыуҙан тертләгәндәй, тағы ла мөйөшкәрәк һырына бареп ятҡан ҡәйнеше. - Мин һине, еңгә, бала сағымдан уҡ беләм. Һөйләшәһе әллә ҡасан уҡ һөйләшеп бөтөлгән. Тағы ла нәмә һөйләшергә була? - Еңгәһенә арты менән әйләнгән көйө йоҡлап китте. Әллә йоҡлап китте, әллә юҡ, әммә башҡаса еңгәһенең һорауҙарына яуап бирмәне, үҙе лә һүҙ ҡушманы.

Ни эшләһен инде меҫкен Мөслимә. Әйләнә-тулғана уйланды ла уйланды. Уның да йәп-йәш сағы бар ине. Шулай уҡ тиҙ үтеп киттеме икән уның йәшлеге? Ғәлләмитдине лә ваҡытһыҙ әрәм булды, бахырҡай. Янында мөйөшкә ҡарап йоҡлап киткән үтә лә тиҫкәре ир йоратына өмөтө ҡалманы. Бөтә тәне буйлап таралған сихри тойғоларынан ҡотола алмай ыҙаланды Мөслимә. Сәскәләй йәш сағын иҫләне. Килен булып төшкәс, көйәнтәһен иңбашына һалып һыуға барған сағында йәш егеттәр унан күҙҙәрен ала алмайҙар, ә йәш ҡыҙҙар көнләшеп баға инеләр. Ул саҡтарҙы Мөслимә бик һағынып иҫкә ала. Их, йәш ғүмер, күҙ асып йомғансы ғына үтәлә китә икән шул. Мөслимәнең шул сағы булһамы, бынауы мөйөштә артын ҡуйып ятҡан ҡәйнеше ошо мәлдә икенсе төрлөрәк мышнар ине, шәй...

Ғарифтың да күңелен аңларға була. Бынамын тигән йәп-йәш егеттең ни өсөн ҡарт еңгәһен ҡосаҡлап ятҡыһы килһен, ти? Әле күптән түгел генә Мөслимә: "Ҡәйнеш, үҙеңә иң матур ҡыҙҙы димләп алып бирәм", - тип шаяртып йөрөй ине. Килендәше менән серләшеп йөрөргә хыяллана ине. Күрәһең, уларҙың яҙмыштары шулайҙыр. "Ярар, ҡәйнеш, йоҡла. Мин һиңә башҡаса бәйләнмәйәсәкмен", тип уйланы Мөслимә. Ләкин артабан шулай нисек йәшәүен күҙ алдына ла килтерә алманы. Тәү ҡарағанда, ялсыларға ҡарата ҡәтғи, үтә уҫал булып күренгән, бөтә хужалыҡты үҙ ҡулында тотҡан Мөслимә ысынында иһә бик шәфҡәтле, яҡшы күңелле ҡатын ине. Уның ниндәй изгелекле, ниндәй ғәҙел кеше икәнен Ғариф та, ялсылар ҙа һуңынан ғына аңланы...

РОБАҒЫЙҘАР

# АРЫҪЛАНДАЙ БӘҺЛЕҮӘН ДӘ...

## ахмаҡ булһа, азамат түгел

Һуҡмайынса саҡма таштан осҡон сыҡмай,
Ҡар иремәй яҙғы йылға ташып китмәй.
Ултыртһаң да һыуға, сәскә, оҙаҡ түҙмәй,
Тормош бит ул хәсрәтһеҙ үтеп китмәй.

Яп(ы)раҡһыҙ аҡ ҡайын да күркәм түгел,
Һөрмә тартмай, һәр йәш ҡатын һылыу түгел.
Зиһене камил булмай, ахмаҡ икән,
Белмәй өрһәң, көй сығармай моңло ҡурай,
Фекер ебем, һә, тигәнсе ерҙе урай.
Уйламайса сиртһәң әгәр тормош ҡылын,
Зиндандарҙа үтер ярты ғүмер юлың.

Зиһене барҙың һуҡыр күҙе йыраҡ күрә,
Ел юҡта ла һалҡын ҡыуышы һалҡын өрә.
Ҡәҙерен белгән ғәзиз итә тыуған ерен,
Яҙып булмай ташты соҡоп фекер ебен.

Тау түшендә ҡутыр таштар туҙып ята,
Ҡартайҙиһә, ҡарағас та аунап ята.
Һунарсы бүре күрһә, төҙәп ата,
Маҡсат ҡуйһаң, һыу үткәрмәй тишек ҡата.

Һаҫыҡ еҫтән танау баҫып ҡотолоп булмай,
Хисапһыҙҙың өйөрөндә малы тулмай.
Күңелен күреп әгәр уйын яуламаһаң,
Һөйгәнеңдең күңел күген аңлап булмай.

Һуҡмаҡ менән барһаң, юлға алып сыға,
Аш-һыуыңды тәмле итә йәшел һуған.
Шәшке алмаһаң, эт тиреһе булыр яғаң,
Ахмаҡ булһаң, ситкә тибер туған-ағаң.

Тәңкә менән алҡа йөҙөн бутап булмай,
Кесерткәнде яланғас ҡул утап булмай.
Телен һөймәҫ,илен һөймәҫ кешеләрҙең,
Төҙәтеп булмай зиһенен ул ишеләрҙең.

Гәлсәр йөҙөн тырнаҡ менән сыйып булмай,
Тупаҫ бысаҡ ҡаты икмәктең ситен ҡыймай.
Тайып төшһәң юлдан ҡаҡҡа сығыу ауыр,
Ә был инде яҙмышында үҙе яр-үр.

Ҡулҡа менән һеңер ите татлы түгел,
Тау йылғала оя ҡора ҡушлы күгәл.
Байлыҡ-муллыҡ, мине ал, тип юлда ятмай,
Бер туғаның эс-серенде ситкә һатмай.

Ҡола атым сәхрә төҫөн үҙенә алған,
Бурыл бейәм тауҙар салын төҫөнә һалған.
Оран һалып, берҙәм алға бармайынса,
Илем күген, халҡым бәҫен һаҡлап булмай.

Бур килмәһә, һоро этем лаулап өрмәй,
Һаран кеше усағынан ҡуҙ ҙа бирмәй.
Хеҙмәтең менән аҡылыңды бергә ҡушмай,
Артыңдан бәхет-муллыҡ эҙләп килмәй.

Ил сигендә һәр саҡ тора ир-ат һаҡта,
Сағылтманы һыҙмам минең кәрәк саҡта.
Хеҙмәт һөйөп, йыйнаҡ булып йәшәмәһәң,
Ятырһың өшөп-ҡатып һәр саҡ ҡаҡта.

Ҡарт инәйем "Туҡта, - тине, - сабыр итсе,
Юлдаш булһын изге теләк минән, улым.
Ҡылған эшең илгә-йортҡа хеҙмәт итһен,
Халҡың өсөн файҙа булып, кире ҡайтһын".

Ҡуҙаҡ борсаҡ бутҡа биреп, эт яраттым,
Ҡыҙған һоло, бесән менән ат яраттым.
Эскерһеҙлек һәм саф күңел һәҙиә итеп,
Дошман күргән күп кешене дуҫ ҡараттым.

Сыйырсыҡ бит яҙын ҡанат ҡағып һайрай,
Маҡсаты бар кеше һәр саҡ тауға атлай.
Тауҙан һәр саҡ тирә -яҡҡа юл күренә,
Һаҙға батһаң йыраҡ түгел гүр үренә.

Батһаң, күтер аяғыңды аҫҡа һура,
Араҡы һәр яҙмыштан өҫтә тора.
Киләсәккә һиҙҙермәй ҡапҡан ҡора,
Ышанмаһаң, Ҡарый ҡарттан барып һора.

**Спартак ИЛЬЯСОВ.**
**Учалы районы.**

✓ *Журналистың үҙенә генә хас сифаттары, характер һыҙаттары ла булырға тейеш. Был - изгелеккә инаныу, дөрөҫлөккә һәм ғәҙеллеккә табыныу. Күңелен ҡара уй, тәкәбберлек биләгән заттан халыҡ ҙурлаған журналист сыҡмай.*



БӘЙГЕ!

# ЖУРНАЛИСТАРҘЫ ЛА...

## себеште лә көҙ һынайҙар



**Тап сентябрь-октябрҙә республика журналистары бер-береһе менән көс һынаша. Ут сәсеүсе ҡорал менән түгел, ә йәмғиәтте яҡшылыҡҡа, матурлыҡҡа, яҡтылыҡҡа алып сығырға тырышып, ҡәләм-ҡоралдарынан, һүҙҙәренән күҙ йәштәре, әсе тир, халыҡ моңо, халыҡ талабы, милләт ауазы булып донъя күргән мәҡәләләрен, сығыштарын тотоп майҙанға сыға улар. Сөнки тап ошо мәлдә журналистика өлкәһендәге иң юғары награда - Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге Хөкүмәт премияһына дәғүәселәр, артабан уның еңеүселәре иғлан ителә. Бөгөн уларҙың бер нисәүһенә ике һорауыбыҙҙы бирәбеҙ:**

**➔ Милли матбуғат сараһы (милли радио-телевидение) бөгөнгө ҡатмарлы шарттарҙа ниндәй идеяға, ниндәй һүҙгә өҫтөнлөк бирергә тейеш?**

**➔ Үҙегеҙҙе был премияға лайыҡлы тип иҫәпләйһегеҙме?**

**Юнир КИНЙӘБАЕВ, Башҡортостан гәзитенең үҙ хәбәрсеһе:**

➔ Бөгөн илде берләштереүсе, бер изге маҡсатҡа туплап, ҡеүәтен күтәреүсе идеяны эҙләйбеҙ, нимәгә тотонорға, ҡайһы башланғысҡа йәбешергә белмәй ыҙа сигәбеҙ. Нимәгә генә ҡағылһаҡ, өмөт бағлаһаҡ та, беҙҙе бәләләрҙән, бөлгөнлөктән, әхлаҡһыҙлыҡтан ҡотҡара, йолҡоп ала алмаҫ кеүек ул саралар. Ошондай мөхит, шарттарҙа бары тик һүҙҙең, ғәҙел һәм дөрөҫ һүҙҙең генә ҡеүәте-ҡөҙрәте бар һымаҡ. Әммә унығы ла, йәшермәйем, ҡараңғылыҡ баҫҡан донъяла бер нур шифаһы кеүек кенә. Ил кимәлендә нәшер ителгән баҫмаларҙы уҡып, электрон мәғлүмәт сараларының йөкмәткеһенә иғтибар итһәң, быға ышанмай сараң юҡ.

Беҙҙең матбуғатҡа, бигерәк тә милли матбуғатҡа килгәндә, был ярлыҡты тотоп булмай, хаҡыбыҙ ҙа юҡ. Республикабыҙҙа нәшер ителгән бер генә матбуғат баҫмаһы ла республикабыҙҙағы хәлторошто ҡырҡыулатыуға, иҡтисади-сәйәси хәлен бөлдөрөүгә, мөшкөлләндереүгә йүнәлтелмәгән, милләт-ара дуҫлыҡ, татыулыҡҡа күптән киҙәнмәй, дошманлыҡ ағыуы сәсмәй, киреһенсә, ғәҙеллеккә, изгелеккә ҡоролған. Милли матбуғатыбыҙҙа был идея ҡыҙыл еп булып үтә. Унан һәр бер халыҡтың, милләттең төп идея, йәшәү идеалы итеп алыр нигеҙҙәре лә бар. Был йәһәттән беҙ ҙә ғорурлана алабыҙ. Халҡыбыҙҙың фажиғәле, әммә бай тарихы бар, һәйбәт йолағәҙәттәрен, традицияларын, тәрбиәүи алымдарын меңәрләгән йылдар ҙа юғалта алмаған. Рухыбыҙҙан, телебеҙҙән яҙмағанбыҙ, халыҡ ижадыбыҙға хайран ҡалырлыҡ, әҙәбиәтебеҙгә, мәҙәниәтебеҙгә, сәнғәтебеҙгә башҡалар һоҡлана, бөйөклөгөнә баш эйә. Милли матбуғат тап шул идеяға табынырға, ғәҙел, изге һүҙгә өҫтөнлөк бирергә тейеш. Ошо изге төшөнсәләрҙе ҡиблабыҙ итеп алабыҙ икән, рухи донъябыҙҙа бөлдөрөр, мәртәбәбеҙгә хилафлыҡ килтерер алама ғәҙәт-ҡылыҡтарҙан да арыныуыбыҙ зарури. Милләтебеҙ өсөн фажиғәле, ҡан илатҡан эскелек, тәмәке тартыу, наркоманлыҡ, бәйһеҙлек, әхлаҡһыҙлыҡ кеүек аламалыҡтарҙан да арынырға бурыслыбыҙ. Башҡа саралар менән бергә һүҙҙең көсө лә бик мөһим, тип уйлайым. Был хәҡиҡәттең дөрөҫлөгөн тормош үҙе раҫлай.

➔ Ижади бәйгелә, конкурста ҡатнашып премия алыуҙы, йә мәхрүм ҡалыуҙы, әлбиттә, ярышҡа сығыусы хәл итмәй - ул баһалаусы (айырым төркөм кешеләре) ҡулында. Ә шулай ҙа теләһә ниндәй шарттарҙа ла халҡың, уҡыусың һинең менән фекерҙәш, ҡараштарыңды уртаҡлаша, идеяларыңды хуплай, бергә борсола, дәғүәләшә, талаптар ҡуя, кәрәк саҡта арҡаҙаш та була икән, журналист өсөн иң ҙур баһа шулдыр, моғайын.

Тормошта йөҙәрләгән һөнәршөғөл бар. Уларҙың һәр береһе әҙәми заттан билдәле һәләт-талант, ниндәйҙер бер йүнәлештә атаҡлылыҡ талап итә. Ә бына журналист кешегә бөтөн һөнәрҙәргә лә хас булған сифат та, аҙмы-күпме һәләттәре лә кәрәк. Уны уҡып та, өйрәнеп тә белеп булмай - тәбиғәт үҙе бирә. Фекеремде коллегаларым мең тапҡыр дәлилләргә әҙер. Әммә журналистың үҙенә генә хас сифаттары, характер һыҙаттары ла булырға тейеш. Был - изгелеккә инаныу, дөрөҫлөккә һәм ғәҙеллеккә табыныу. Күңелен ҡара уй, мәкер, тәкәбберлек биләгән заттан бер ваҡытта ла һәйбәт, халыҡ хөрмәт иткән, ҙурлаған журналист сыҡмай. Мин үҙем бала саҡтан уҡ эш дәүеремдә, ғүмерем буйы, әҙәм балаһы һәйбәт баһаһын биргән сифаттарға инанып, табынып йәшәнем һәм эшләнем. Уҡыусыға журналистың тормош позицияһы, баһаһы, фекере бик тә мөһим, шуның өсөн һәр бер яҙмамда ул асыҡ билдәләнә, ярылып ята ине. Хаҡ һүҙем менән кемгәләр ярҙамым тейеү, күңелдәрен күтәреп ебәреү, йәшәүгә, донъя көтөргә көс биреп, дәртләндереү, өмөт саткыларын уятыу ҙа минең өсөн ҡаҙаныш ине. Утыҙ йыл эшләү дәүеремдә бик күп ауылдың ауыр яҙмышын уртаҡлашыу ғына түгел, уларҙың ыңғай яҡҡа үҙгәреүендә ярҙамым күп тейҙе. Иштуған һыуһаҡлағысы төҙөлөшөн туҡтатыу, ябыу өсөн барған көрәштең уртаһында ҡайнарға, уның нигеҙһеҙ булыуын, тирәйүн тәбиғәткә, халыҡҡа оло ҡаза, фажиғә килтереүен дәлилләп, тиҫтәләгән мәҡәләләр яҙҙым. Башҡа нигеҙләүҙәр менән бергә, минең сығыштарым да "яһалма диңгеҙ"ҙән ваз кисеүгә сәбәп булды. Ошоғаса һыуһаҡлағыс аҫтында ҡалыр (төҙөлә ҡалғанда) ауылдар халҡының мең рәхмәтен ишетәм, хөрмәтен тоям.

Утыҙ йыл эсендә яҙылып, "Башҡортостан" гәзите биттәрендә донъя күргән, иң-иң һәйбәт, дөрөҫөрәге әхлаҡи һәм тәрбиәүи йәһәттән әһәмиәтле материалдарымды яңынан ҡарап, бергә туплап, айырым темаларға берләштереп, китап итеп сығарыуым да юҡҡа түгел - кемдәргәлер файҙаһы тейер, фәһем бирер, тип уйлауым. Йәш журналистар танышһа, бер ҙә яҙыҡ булмаҫ. Утыҙ йыллыҡ яҙмаларҙың тәьҫир көсө, моғайын, бушҡа китмәҫтер...

**"Өмет" республика татар йәштәре гәзите коллективы:**

➔ Матбуғат тарихына күҙ һалһаң, ул беҙҙең илдә элек-электән дәүләт менән халыҡ араһын бәйләп тороусы күпер ролен башҡарған. Әле Петр Беренсе замандарында уҡ батша фармандары халыҡҡа матбуғат аша барып еткән. Ә беҙҙең милли - башҡорт һәм татар матбуғатына килгәндә, ул иң элек уҡыусыларҙың рухи ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереүҙе төп бурысы итеп ҡуйған. Уҙған быуаттың 80-се йылдарына тиклем ошо изге идеалдарға тоғролоҡ һаҡланы ул, әле лә шуға ынтыла. Әммә 90-сы йылдарҙа илдә киҫкен үҙгәрештәр булды, рухи ҡиммәттәр үҙгәрҙе. Үҙәк матбуғатты, бигерәк тә телевидениеһын, ғәйбәт һатыу, кеше намыҫын бысратыу, әхлаҡһыҙлыҡ идеяларын алға һөргән яҙмалар, тапшырыуҙар баҫып китте. Экрандарҙа, гәзит биттәрендә хеҙмәте, күркәм ғәмәлдәре менән дан ҡаҙанған шәхестәр түгел, бурҙар, буш вәғәҙәләр менән кеше башын ҡатырып, власҡа үрләгән бәндәләр төп геройға әүерелде. Бына шундай көнбайыш тәрбиәһен аңына һеңдергән быуын үҫеп етте бөгөн. Хәҙер килеп, саң ҡағалар: йәштәребеҙҙә патриотик тойғо һүнгән, йәштәребеҙ әҙәпәхлаҡ ҡағиҙәләрен һанға һуҡмай, йәштәребеҙ наркотиктар менән мауыға...

Ни эшләргә? Мәсьәләне төрлө темаларға арналған закон акттары ярҙамында хәл итмәк булалар. Шул уҡ ваҡытта телеканалдарҙа йәш быуындың аңын томалаған, уны тайғаҡ юлға ымһындырған түбән кимәлдәге зауыҡһыҙ тапшырыуҙар көн һайын ҡабатланып тора. Бына шундай шарттарҙа беҙҙең милли матбуғат үҙ асылын һаҡлап ҡалырға тырышты. Республикабыҙҙағы радио һәм телевидение, дәүләт ҡарамағындағы баҫмалар "һарылыҡ" менән сирләмәне. Һеҙ консерваторҙар, һеҙҙе уҡыуы күңелһеҙ, тигән ғәйеп ташлауҙар ҙа журналистарыбыҙҙың ҡиблаһын үҙгәртә алманы. Был беҙҙең милли менталитеттан киләләр ул. Халҡыбыҙ элек-электән гәзит һүҙенә етди ышанған, әле лә ышана, уны үҙенең серҙәше, ярҙамсыһы, таянысы итеп күрә. Беҙ, журналистар, шуны тойоп, уҡыусыларыбыҙҙың зауығына яуап бирергә тырышабыҙ. Ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе, әҙәби, рухи мираҫыбыҙҙы, мәҙәниәтебеҙҙе киң ҡатлам халыҡҡа еткереүсе төп көс түгелме икән әле ул матбуғат? Туған телебеҙҙе һаҡлаусы ҡалҡан, уның аҫыл гәүһәрҙәрен меңәрләгән уҡыусы күңеленә һеңдереүсе лә ул.

➔ Был премияға лайыҡлыбыҙ тип уйлайбыҙ. "Өмет" бөгөн республикала иң ҙур тираж (27 меңдән артыҡ ғаилә алдыра уны) йыйған баҫма булып ҡала. Ә уҡыусы ихтирамын, уның ышаныһын яулау, бигерәк тә уны оҙаҡ йылдар буйына юғалтмау еңел түгел. Һуңғы тиҫтә йылда матбуғат үҙенең иң аҫыл сифатын - тәьҫир көсөн юғалта яҙҙы. Тәнҡит мәҡәләләренә, гәзиттә күтәрелгән етди мәсьәләләргә иғтибар һүлпәнәйҙе. Тешһеҙләндек. Беҙ үҙ алдыбыҙға шуларҙы тергеҙеү, күтәрелгән мәсьәләләрҙе аҙағынаса еткереү маҡсатын ҡуйҙыҡ. "Алло, "Өмет" тыңлай" проекты шулай тыуҙы. Ике-өс йыл эсендә уҡыусыларыбыҙҙы борсоған шаҡтай мәсьәләләр матбуғат көсө менән хәл ителде. Был проект "Өмет" гәзитен уҡыусыларына тағы ла нығыраҡ яҡынайтты. Проблеманы күктән эҙләмәйбеҙ, халыҡ үҙе әйтә.

Ә инде "Ни өсөн шулай?" тигән рубрикабыҙ аналитик мәҡәләләрҙе үҙ эсенә ала. Ябай уҡыусы түгел, хатта беҙ, журналистар, яуап таба алмаған, аптыраған нәмәләр күп бөгөнгө тормошта. Мәҫәлән: "Ни өсөн беҙҙә эш хаҡы түбән? Торлаҡ хаҡы ниңә иң ҡиммәт? Иген унды, ә хаҡтар шул килеш?" һ.б., һ.б. Әлеге проблемаларҙы күтәреү менән генә сикләнмәйенсә, белгестәргә мөрәжәғәт итеп, уларҙың асылын аңларға тырышабыҙ, сисеү юлдары эҙләйбеҙ.

**Рита ӨМӨТБАЕВА, "Башҡортостан" ТРК-һы дәүләт унитар предприятиеһының күңел асыу программалары редакцияһы етәксеһе:**

➔ Бөгөнгө сәйәси ваҡиғалар ҙур тиҙлек менән үҙгәреп торған заманда милли матбуғат саралары халыҡҡа хеҙмәт итергә, халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртырға, халыҡ рухына таянырға, уға яҡын темаларға өҫтөнлөк бирергә тейеш, тип уйлайым. Йәғни журналист үҙ уҡыусыһында ниндәйҙер фекер, уй, хис-тойғо тыуҙырырға тейеш. Мәҫәлән, тыуған илең, милләтең менән ғорурланыу. Ғорурлыҡ - ул шундай көс, шундай тойғо, уны хатта алға әйҙәй торған ихтыяр көсө тип тә әйтер инем. Мәҫәлән, Шүлгәнташ кеүек берәй мәмерйә бармы башҡа субъекттарҙа? Беҙҙеке кеүек тәбиғәт бармы? Бәлки, барҙыр, әммә беҙҙеке, Башҡортостандыҡы үҙенсәлекле. Шуға ла тыуған илеңә һөйөү, тәү сиратта, ғаиләңә, ауылыңа, ҡалаңа, Башҡортостаныңа һөйөүҙән, уның менән ғорурланыуҙан башланалыр. Шуға күрә тарихи шәхестәр, иҫтәлекле урындар, абруйлы шәхестәр менән бер рәттән, ябай кешеләрҙе, уларҙың ҡәҙимге көнитмешен дә күрһәтергә, яҙырға тейешбеҙ. Кемдер әҙ эш хаҡы алыуы менән, кемдер машинаһы булмауы менән үҙен кәм тоя, кәмһенә. Ә беҙ шуны әйтергә тейешбеҙ: милләтенә, дәрәжәһенә, данына ҡарамайынса, бөтөн кеше лә тиң хоҡуҡлы. Бары тик кеше үҙенең хоҡуҡтарын белһен һәм лайыҡлы, ғорурланырлыҡ тормош өсөн тырышлыҡ һалһын. Уҡыусыларға, тамашасыларға шундай әйҙәүсе, тормошта юл күрһәтеүсе мәҡәләләр, тапшырыуҙар кәрәк.

➔ Мәктәптә уҡығанда уҡ башланғыс кластарҙан "Башҡортостан пионеры" гәзитенә яҙыштым. Өсөнсө класта "Йәш хәбәрсе" исеме алдым. Башҡа гәзиттәр менән дә әүҙем хеҙмәттәшлек иттем. Шуғалыр ҙа, Башҡорт дәүләт университетының журналистика факультетына бер ҡаршылыҡһыҙ ҡабул иттеләр. Башҡортостан радиоһында ауыл хужалығы тапшырыуҙары бүлегендә эш башланым. Һуңынан телевидениеға күскәс, "Аҡ тирәк, күк тирәк" тигән ток-шоуҙы алып барҙым, "Айгөл иле" тигән тапшырыуҙар циклын әҙерләп тамашасы хөкөмөнә сығарҙым. Хәҙер "Байыҡ", "Башҡорт йыры" тапшырыуҙарын тәҡдим итәбеҙ. Идеялар күп, эшләргә лә эшләргә. Халыҡ ижадын, халыҡ сәнғәтен, халыҡ мәҙәниәтен ошо телевизион вариантҡа һалып, күрһәтеп, позитив телевидение булдырыу инде иң төп маҡсатыбыҙ.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА, "Башҡортостан" ТРК-һы дәүләт унитар предприятиеһының радио тапшырыуҙары студияһы комментаторы:**

➔ Һәр заман кешелек алдына үҙ проблемаларын ҡуя. Ваҡытлыса хәл ителә торғандары менән бер рәттән, мәңгелектәре - йәғни илде, телде, динде һаҡлау һымаҡ һәр быуын ҡайтанан хәл итергә бурыслы мәсьәләләр булған, буласаҡ. Улар юғалмай, ә цивилизация үҫешенә бәйле, яңы аспектта, яңы яҫылыҡта ҡалҡып сығып тора. Беҙҙең өсөн милли идея төшөнсәһен З. Вәлиди үҙенең хушлашыу хатында бик асыҡ

әйткән. Беҙ бары тик үҙебеҙҙең эшмәкәрлектә шуларҙы иҫтән сығармаҫҡа тейешбеҙ. Бәләкәй ауылдар яҙмышы, мәктәп, туған телдә уҡытыу - береһе лә көтөлмәгән, беҙ бығаса күрмәгән-белмәгән проблемалар түгел, улар яңынан ҡалҡып сыҡты, хатта алыҫ тарихҡа ла боролорға кәрәкмәй, уны олораҡ быуындар яҡшы хәтерләй. Илебеҙҙә уҙған быуаттың 90-сы йылдары башында барған демократик үҙгәрештәр аҙ һанлы халыҡтарға азатлыҡ һулышын биргәйне, бына әле яуланғандарҙы кире тартып алыу башланды. Тарих ҡабатлана һәм нисәмә быуаттар шулай йәшәлә... Шуға күрә лә, бер нәмәгә ҡарамаҫтан, һәр милләттең үҙенең юғары маҡсаттары, шуға ынтылыш булырға тейеш. Ә беҙ, милли баҫма, милли радио-телевидение журналистары, халҡыбыҙға шул маҡсатты тормошҡа ашырыуға ярҙам итергә тейешбеҙ.

Беҙҙең эраға тиклем II мең йыллыҡта йәшәгән боронғо төркиҙәрҙең идеяһын да тарих, ниндәйҙер кимәлдә, беҙгә килтереп еткергән, тип әйтә алабыҙ. Юғары ынтылыш уларға Европаны яуларға көс биргән һәм унда йәшәүсе халыҡтарҙы үҙ ҡаҙаныштары менән хайран иткән. Уларҙың фекер ярпылары: "Бар булығыҙ, төркиҙәр!" "Төрки халҡы өсөн тынлыҡ тапмайынса, мин тәндәрен дә, көндәрен дә йоҡламаным... Юҡҡа сыҡмаясаҡ төрки халҡы! Төрки халҡының исеме лә, даны ла юҡҡа сыҡмаясаҡ!" - тигәне таш яҙмалар аша беҙгә лә ишетелде. Бар булыу өсөн бөгөн беҙгә телде, динде һаҡлау, балаларҙы туған телдә уҡытыу ҡаҡшамаҫ маҡсат булырға тейеш. Ата-бабаларыбыҙ был ерҙә меңәр йыл көн иткән, киләсәген ошо ер менән бәйләгән. Үҙенең ғәзиз ерендә йәшәп, ниндәйҙер көрткәләрҙән һағайыу, ҡурҡыу, ошо рухи төшөнсәләрҙе һаҡлау ынтылышында кемдәрҙәндер алдында аҡланыу урынһыҙ ҙа һымаҡ. Хатта ғаиләлә үҙ балаһына туған телен өйрәтергә йыбанған бәгзе ата-әсәгә нимә тип әйтәһең инде?..

➔ Журналистика - объектив ысынбарлыҡты журналистың субъектив ҡарашы аша сағылдырыуы ул. Шулай булғас, үҙенең субъектив баһаһын әйтә белеү - журналистың төп үҙенсәлеге. Баһалау, анализлау, һығымталар яһау, тегеләйҙе был ваҡиғаның төп маҡсатын асыу, уҡыусының иғтибарын теге йәки был проблемаға йүнәлтеү - журналистың кимәлен билдәләй һәм материалды уҡымлы ла итә. Тимәк, был һөнәр күп уҡыуҙы, ҡайһы ғына өлкәлә булмаһын, белемде камиллаштырыуҙы талап итә. Журналист үҙ материалында яңы мәғлүмәт тә бирергә тейеш. Фекере булмаһа, яҙған-һыҙғанының ниндәй ҡиммәте булһын?

Һәр милләттең этник структураһын төҙөүсе компоненттары - зыялылар, ижадсылар. Халыҡ өсөн хәл иткес мәлдәрҙә улар һүҙе кәрәк. Әллә ҡайҙа алыҫ тарихҡа күҙ һалмайынса ла, миҫал итеп Аҡмулланы, Ш. Бабичты атарға мөмкин. Радиола алып барған "Әҙип һәм заман" тапшырыуы шундай маҡсатҡа хеҙмәт итә. Бөгөн мин төрлө быуын яҙыусылары менән әңгәмә ҡорам. Уларҙың фекерҙәре аша үҙемдең дә донъяға ҡарашым үҫә баралыр. Әҙиптәр проблемаларҙы күтәрә, ҡараштарын төплө итеп дәлилләй белә. Улар йәмғәтселек фекерен формалаштырыуҙа, уның рухын үҫтереүҙә ҙур роль уйнай. Образлы итеп әйткәндә, йәмғиәттең барометры ла, компасы ла. Ҡәләм оҫталарының фекерен, аҡыл емештәрен, уй-ынтылыштарын, идеяларын эфир аша яңғыратып, тыңлаусы күңелен яңы кисерештәр менән байытыу һәм уйландырыу - изге маҡсат. Аҡыл - кешелек һәр саҡ мохтаж булған ҡиммәттәрҙең береһе. Дөйөмләштереп әйткәндә, фекерҙә әҙәм балаһы күңелен генә түгел, ваҡытты хәрәкәткә килтереү көсө бар. Ошо көстө тыңлаусыларыма еткерә алыуым менән бәхетлемен.

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

# БӨЙӨК ВӘЛИДИ ТУРАҺЫНДА...

## уның шәхесенә тиң китап



**Әхмәтзәки Вәлидиҙең башҡорттар араһынан сыҡҡан иң бөйөк шәхестәрҙең береһе икәнлеге бәхәсһеҙ булған кеүек, уның исеме һәм хеҙмәте лә тарих тупҙанына күмелергә тейеш түгеллеге күңелендә саҡ ҡына булһа ла милли ғорурлыҡ йәшәткән һәр кешегә лә мәғлүм. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, быуатҡа яҡын ваҡытта Башҡортостанда һәм Рәсәйҙә Вәлидиҙең исемен тарих тупҙанына күмеп ҡалдырыу һәм уның тураһындағы хәтирәләрҙе халыҡ йөрәгенән йолҡоп ташлар өсөн дә күп тырыштылар. Әммә бер ни ҙа булдыра алманылар.**

Егерме йыллап арауыҡта Башҡортостан Республикаһы Президенты һәм Хөкүмәтенең хуплауына ниғеҙләнеп, Әмир Юлдашбаев, Марат Ҡолшәрипов, Дамир Вәлиев кеүек тарихсылар, ғалимдар, Роберт Байымов, Ғәлим Хисамов иһе яҙыусылар һәм бик күп ғәмәли эш башҡарыусылар Зәки Вәлиди исемен тыуган иленә ҡайтарыуға байтаҡ көс һалды. 2010 йыл аҙағында, Әхмәтзәки Вәлидиҙең тыуыуына 120 йыл тулған көндәрҙә, Зәйнәб Биишева исемендәге "Китап" нәшриәте "Әхмәтзәки Вәлиди" тигән китап баҫтырып сығарҙы. Алдан уҡ шуны билдәләйек: был китап башҡа баҫмаларға оҡшамауы менән айырылып тора. Унда тарихи дөрөҫлөк һәм хронология принциптары теүәл һаҡлана. Унда урынлаштырылған документтар һәм күп йылдар дауамында ваҡыт һынауын үткән хәтирәләрҙе баҫтырыу юлы менән дөрөҫлөккә өлгәшелһә, хронология ысулы Әхмәтзәки тыуған мәлдән ғүмеренең аҙағынаса эҙмә - эҙлекле ваҡыт ағышын сағылдырыу менән тәьмин ителгән. Китапты төҙөүселәр: Ғәлим Хисамов, Тәлгәт Сәғитов, Ғәлиә Ғәлимова Вәлиди хаҡында яҙма ҡомартҡыларҙы белеү генә түгел, уның тормош юлын махсус өйрәнгән, уның тураһында төрлө күләмдә күп жанрҙа әҫәрҙәр яҙған, башҡорттар юлбашсыһының туған-тыумасаһын белгән, уларҙың бөгөнгөләре менән яҡындан аралашҡан кешеләр. Шуға улар Вәлиди кеүек ҙур шәхесте һынландырған бик күп документ һәм материал араһынан тап ошо китап өсөн кәрәклеләрен айырып алып, уҡыусыға тәҡдим иткән.

Китапта ике йөҙгә яҡын фотоһүрәт бар. Бындай күләмдә улар бер генә баҫмала ла сыҡҡаны юҡ ине. Фотолар Вәлиди тормошоноң иң әһәмиәтле мәлдәрен сағылдыра. Әйтәйек, Вәлидиҙең Урта Азиялағы көрәш дәүеренә ҡағылышлы һүрәттәре табылмағас, китапты төҙөүселәр шул осорҙағы ҡала йә ауыл күренештәрен тәҡдим итә. Ташкент, Сәмәрҡәнд, Бохараның XX быуат башындағы һүрәттәре китапта ошо айҡанлы урын алған.

Әхмәтзәки Вәлиди башҡорттоң ғына бөйөк улы түгел. Ул тотош донъя кешеләренең ирке, байман йәшәүе өсөн көрәшкән, күп илдәр халҡының фәнен, мәғарифын күтәреүгә ҙур хеҙмәт һалған шәхес. Ул башҡортҡа ныҡ ҡәҙерле булған һымаҡ, үзбәк өсөн дә, татар менән ҡаҙаҡ өсөн дә, немец менән төрөк, албан менән ҡырмыҙ, инглиз менән ҡумыҡ өсөн дә бик яҡын. Шуны күҙ уңында тотоп, төҙөүселәр китапты дүрт телдә тәҡдим итә: башҡортса, урыҫса, төрөксә һәм инглизсә. Ошо телдәрҙә бер юлы яңғыраш алған яңы мәғлүмәт сығанағы ла бар. Был Тәлгәт Сәғитов төҙөгән Вәлиди тормошоноң иң мөһим ваҡиғалар теҙмәһе. Дөрөҫ, ундай теҙмә бығаса ла төҙөлгәйне. Сәғитовтыҡы, моғайын, иң тулыһылыр.

Китап иң тәүҙә тышҡы күренеше, биҙәлеше менән иғтибарҙы йәлеп итә, шунан һуң ғына уҡыусы уның эстәлегенә күҙ һала. Был яңылыҡ түгел, әммә мәңгелек шарт. Зәйнәб Биишева исемендәге "Китап" нәшриәте "Әхмәтзәки Вәлиди" китабын эшләгәндә ошо хәҡиҡәттән тайпылмаған. Китап юғары талаптарға яуап бирерҙәй зауыҡ һәм өр-яңы дизайн, төҫтәрҙең сағыулығы менән ҡуша ярым тоноҡ, үтә тоноҡ балҡыштар менән ҡатнаштырып биҙәлгән. Биҙәү ысулы китаптағы документтарҙың, материалдарҙың, фотоларҙың хисен, тойғоһон аса. Тышлыҡта өҫтөнлөк иткән төҫ - көрәнһыу-ҡара. Һыныҡ сыҙыҡтар эсендәге яҡтылыҡҡа Әхмәтзәки Вәлидиҙең бик матур фотоһы ҡуйылған. Әйтерһең, "Беҙҙең араға үтеп сыҡҡыһыҙ упҡын һалдылар. Әммә яҡтылыҡ һиппергә тырышам һинә, ғәзиз халҡым минең", ти Вәлидиҙең моңһоу фотоһы. Төҫтәр, яҡтылыҡ, хәрефтәрҙең биҙәлеше, төрлө телдәге документтарҙы урынлаштырыу оҫтаһы - китаптың рәссамы Юрий Илингин.

"Әхмәтзәки Вәлиди" китап сығарыусылар араһында бик юғары баһаға лайыҡ булды ла инде. Рәсәй Федерацияһындағы 80-дән ашыу иң ҙур нәшриәт сығарған 200 - ҙән ашыу китап араһында ул иң яҡшыһы тип танылды. Ҙур баһа был. Бына ошо китап Башҡортостан Республикаһында йыл да уҙғарыла торған Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге журналистар премияһына ла тәҡдим ителде. Миненсә, китап был баһаға һис шикһеҙ лайыҡ. Китапты төҙөүселәр Ғәлим Хисамов, Тәлгәт Сәғитов, Ғәлиә Ғәлимова, рәссам Юрий Илингин Башҡортостан матбуғатында киң билдәле шәхестәр. Улар Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премияны булдырыуҙа иң әүҙем ҡатнашҡан шәхестәр. Хикмәт унда ла түгел. Хикмәт - бөйөк Вәлиди тураһында уның шәхесенә тиң китап булдыра алыуҙа. Республикабыҙҙың дәүләт эшмәкәрҙәре лә, йәмәғәтселек тә ошо фекерҙе хуплар, тибеҙ.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Ҡатын-ҡыҙҙың үҙбаһаһы

Ниндәйҙер кимәлдә ҡатын-ҡыҙ булыуы ауыр ул. Барыһы ла бала саҡтан, ҡыҙҙарҙы тәрбиәләүҙән башлана. Математика, техника һәм башҡа фәндәр тик ир-ат өсөн генә тип һанала һәм ҡатын-ҡыҙҙа баҙнатһыҙлыҡ тыуҙырыла. Шулай итеп тотҡарлыҡ һәм түбән үҙбаһа тыуа. Ҡыҙҙар мәктәптә уҡығанда уҡ тәбиғи фәндәр гүзәл зат өсөн дә асыҡ һәм баш әйләнерлек уңыш килтереүе мөмкин икәнлеген аңларға тейеш. Әгәр быға ваҡытында өйрәтмәгәндәр икән, улар үҙҙәрен ҡайтанан программалап, был өлкәләрҙә эшләүгә лә лайыҡлы икәнлектәрен күҙалларға тейеш.

**● Минең енесем бер ниндәй ҙә етешһеҙлектәргә эйә түгел. ● Эш техник тәфсирҙән торһа ла, мин баш менән эшләргә һәләтле. ● Әгәр мин ошо өлкәлә эш башлаһам, бәхетле буласаҡмын.**

Ҡатын-ҡыҙға бер ваҡытта ла үҙенең мөмкинлектәре һәм һәләттәре тураһындағы күҙаллауҙарын яңыртырға һуң түгел. Ыңғай өндәге-төш эш урынында ир-аттың эгоизмын һәм енси ниәттәрен еңеп сығырға туранан-тура ярҙам итә. Көсөргәнештән арынып, ыңғай күренештәрҙе күҙаллау - ир-аттың өҫтөнлөккә дәғүәһен енеп сығыуҙы аңлата. Өндәге-төш ысынбарлыҡҡа әйләнә. Һеҙ, ҡатын-ҡыҙ, һәр саҡ үҙегеҙ лайыҡлы булған өлкәлә ихтирам яулай башлаһығыҙ. Һеҙҙең тән телегеҙ, йөҙөгөҙ, тауышығыҙ ир-аттың залимлығына яҡшы яуап биреү буласаҡ.

**● Минең уңыштарым бер нәмә менән дә сикләнмәгән. ● Минең ҡатын-ҡыҙ булыуым - етешһеҙлек түгел, ә өҫтөнлөк. ● Мин - Ижад итеүҙә баһалы ҡатнашыусы.**

Әгәр һеҙ әсә икән, ҡыҙҙарығыҙҙың киләсәген еңеләйтә алаһығыҙ. Бының өсөн улар менән үҙ-үҙҙәренә ышаныс тыуҙырған әңгәмәләр үткәрергә, һәр саҡ дәртләндереп торорға кәрәк.

Ситтән генә берәй хеҙмәт урынына күҙ һалайыҡ. Унда ҡатын-ҡыҙ менән ир-ат - уның етәксеһе әңгәмәләшә. Ҡатын етәксеһенең һәр һүҙенә өҙөлөп-өҙөлөп яуап бирә. Ул нимә эшләй? Етәксеһенә ялағайланырға тырышамы йәки үҙенең һалҡынлығын уйлап сығарылған ҡорма менән ҡаплаймы? Был мөһим түгел. Ир-ат күҙлегенән ҡарағанда, ҡатын-ҡыҙ үҙе уҡ хеҙмәт урынында ир-егеттәрҙәнтүбән урын биләүҙе күрһәтә.

Шул уҡ етәксе менән һөйләшкән икенсе ҡатын-ҡыҙға ҡарайыҡ. Ул "хәүефһеҙ" арауыҡта тора, кәүҙәһе тура, тыныс, һаран ғына ишаралар яһай. Әңгәмәсе һөйләгәндә ул уны иғтибарлап тыңлай, әммә һүҙҙәрҙең мәғәнәһенә генә ихтирамлы ҡыҙыҡһыныу күрһәтә. Был ҡатын хәл-торош менән идара итә, ир-атта әһәмиәтле кеше тәьҫоратын ҡалдыра.

Әгәр һеҙ кейәүҙә түгел икән, быны икенсе сағыштырыуҙа аңлауы еңелерәк буласаҡ. Ниндәйҙер кисәлә тормош иптәше булырҙай кандидатураны осраттығыҙ, ти. Һеҙ уға нисек тә яҡыныраҡ булырға, уның ҡулына ҡағылырға тырышаһығыҙ. Теләһә ниндәй күҙәтеүсе кеше янбаштарығыҙҙы саҡ ҡына тирбәлтеп атлағанығыҙҙы ла һиҙер. Бындай хәрәкәттәр менән, гүйә, һеҙ: "Мин һинеке", - тиһегеҙ.Үкенес, ул быға иғтибар ҙа итмәй...

Нәфислек һәм ижади һәләттәр араһында дөрөҫ баланс булдырыу өсөн ҡатын-ҡыҙға был теләкте көндәлек аффирмациялар менән ныҡытырға һәм уны йышыраҡ ҡулланырға кәрәк.

**● Мин ҡатын-ҡыҙҙар һәм ир-аттар менән берлекте ихлас тоям. ● Мин улар араһындағы айырмалыҡҡа ихтирам менән ҡарайым. ● Мин бөтөн халыҡты бер ғаилә тип иҫәпләйем.**

**Роберт СТОУН.**



## 26 СЕНТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Участковый детектив"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Свобода и справедливость" с Андреем Макаровым". Ток-шоу
18.00 Вечерние новости
18.45 "Давай поженимся!"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Условия контракта", 5-я серия. Сериал
22.30 "Нонна, давай!" Скетч-шоу Нонны Гришаевой
23.00 "Прожекторперисхилтон"
23.35 Ночные новости
23.45 "Форс-мажоры", 1-я серия. Трагикомедия
01.20, 03.05 "Чокнутый профессор-2: семейка Кламп"
03.00 Новости
03.20 "Американская семейка"
04.10 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Тайны следствия". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 146-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 175-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 252-я серия
18.55 "Прямой эфир". Ток-шоу
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Ключи от счастья. Продолжение", 1-3-я серии. Сериал
23.30 "Пришельцы. История военной тайны". Док. фильм
00.35 "Вести+"
00.55 "Профилактика"
02.05 "Ядовитый плющ-3". Триллер
03.50 "Комната смеха"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Эра стрельца". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок-4". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Морские дьяволы". Остросюжетный сериал
21.30 "Глухарь. Возвращение". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Честный понедельник"
00.30 "Футбольная ночь"
01.05 "Таинственная Россия: Сахалин. Исчезнувшая цивилизация плавучего острова?"
02.00 "Суд присяжных"
02.05 "До суда"
03.05 "Столица греха". Остросюжетный сериал
04.55 "Основная версия". "Тихое место". Криминальный сериал

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости недели"**
